✓ *"Юл башы - бер рюмка, юл уртаһы - эсеүсе компания йәки аш алдынан бер рюмка, юл һуңы - төрмә, психиатрия дауаханаһы, ҡәбер".*

*Джек Лондон.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

24 - 30 МАРТ (БУРАНАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№12 (482)

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ят ярлыҡамай, үҙеңдеке үлтермәй



3

Мәҙәниәт, имеш...



5

Хан эҙләткән аҫылташ...



8-9 халҡыбыҙ күңелендә ята

Сирен аҙҙырған... ғүмеренән яҙған



12-13

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Беҙҙең бөтә балаларебеҙҙең башы битарафлығыбыҙҙа түгелме?

*Гөлнур ДӘҮЛӘТЙӘРОВА, "Ашҡаҙар" Стәрлетамаҡ район һәм ҡала гәзитенең баш мөхәррире:*

Йәнде ҡыйған ул битарафлыҡ күренештәре, үкенескә ҡаршы, аҙым һайын осрап тора. Күптән түгел Өфөлә булғанда күргәндәрем дә ошоға бик урынлы миҫалдыр, тием. Ҡайҙа-ҡайҙа, ә баш ҡалабыҙ йөрәге булған Салауат Юлаев һәйкәле майҙансығында ҡыйылды күңелем. Тап шунда тирмә-магазин эшләп тора бит. Ситтән килеүсе ҡунаҡтар ҙа унда мотлаҡ инеп сыға. 'Ағиҙел" художество берекмәһе етештергән башҡорт сувенирҙары һәм башҡа төр милли тауарҙар һатыла бында. Беҙ сәксәк менән баллап-тәмләп сәй эсеп алайыҡ тип ингәйнек унда. Ҡолаҡҡа ятышһыҙ сит ил музыкаһы менән ҡаршы алып, бөтөнләй кәйефте ҡырҙылар. Сәй ҡайғыһы китте, әлбиттә. Башҡорт тирмәһендә нињә туған мондарыбыҙ ағылмай? "Үҙебеҙҙең йүнле йырҙар бармы ни һуң? Башҡорт йыры яҙмалары юҡ бит", - тип аптыратты һатыусы туташ беҙҙең һорауға ҡаршы. Ниңә был хәл башҡаларҙы борсомай, ниңә башҡалар ҙа тирмә-магазин хужаларынан ошо ябай ғына, еңел генә тормошҡа ашырыр һорауға яуап талап итмәй икән? Был майҙанда күберәк беҙҙең милләттәштәр, радио-телевидение журналистары ла йөрөп ята бит. Тимәк, битарафлыҡ көслө. Бер аҡыл эйәһе әйткән бит: "Дошманыңдан ҡурҡма, һуңғы сиктә ул һине үлтерәсәк икәнен беләһең, дуҫыңдан да ҡурҡма, һуңғы сиктә ул һине һатасаҡ икәнен дә беләһең, битарафтарҙан ҡурҡ, донъялағы барлыҡ насарлыҡтар уларҙың өнһөҙ ризалығы менән тормошҡа ашырыла", тип. Дөп-дөрөҫ. Бындай битарафлыҡ менән ҡайҙа килеп төртөлөрбөҙ икән? Ишембайҙағы башҡорт-төрөк кухняһындағы менюға иғтибар итә ҡуйҙым бер саҡ. Унын хужаларынын "фантазияһы" һушыңды алырлыҡ: мосолман аштары ашханаһында сусҡа итенән шешлек тәҡдим итәләр! Шул уҡ ваҡытта сағыштырыу өсөн Стәрлетамаҡтағы үзбәк-төрөк ашханаһын килтерә алам. Башҡортостан ҡалаһында эшләп тороуҙарына ҡарамаҫтан, үзбәктәр үҙ рухтарына тоғролар: фәҡәт үҙҙәренең аш-һыуын әҙерләйҙәр, көнө буйы үҙҙәренең йыр-мондары яңғырап тора. Бына бит нисек эшләргә була! Теләһәк, сәмләнһәк, беҙҙең дә бөтә нәмә ҡулдан килә. Анау тиклем ығы-зығы, тартҡылаштан һуң да һаҡлап ҡала алдыҡмы Торатауыбыҙҙы? Башҡаларын да бирмәбеҙ емерергә - тик саҡ ҡына уяуыраҡ, сәмлерәк һәм, иң мөһиме, берҙәмерәк булайыҡсы, туғандар.

**(Дауамы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# БАШҠОРТ ЮМОРЫНЫҢ...

## матур өлгөһөнә әйләнә "Шаяниум"

**Өфө мәктәптәре уҡыусылары йыл да көтөп алған шаяндар һәм тапҡырҙар бәйгеһе - "Шаяниум"дың тәү тапҡыр сәхнәгә сығыуына ун йыл да булып киткән икән. Бер нисә көн рәттән бәйгенең һайлап алыу турҙары үтте. Ҡала мәҙәниәт һарайында үткән финал-кисәлә иһә бәйгегә йомғаҡ яһалды. Хәбәрсебеҙ һайлап алыу турҙарында ҡатнашып, уйындарҙы күҙҙән үткәреп, ҡайһы бер һығымталар яһаны.**

**(Дауамы 6-сы биттә.)**



М. Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы "һупайлы дәрүиштәре" командаһы.

✓ *Өфөнө йорттар араһында урынлашҡан төрлө төçтәге, әллә нимәләр яҙылып бөткән гараждар йәмһеҙләй. Әлбиттә, уларҙы бөтөнләй алыу мөмкинлеге булмаһа ла, бер төрлөрәк итеп буяу-рәтләү талабын ҡуйыу кәрәктер.*



БАШ ЙОРТТА...



# ИÇКЕЛӘРЕ ЛӘ ҺҮТЕЛМӘҺЕН

**Өфөлә тыуып үçтем һәм әле лә ғаиләм менән ошо матур ҡала йәшәйем. Иремдең эше буйынса төрлө ҡалаларҙа, хатта сит илдә лә йәшәп алырға тура килде. Шуға күрә миңә Өфөбөҙҙө башҡа ҡалалар менән сағыштырыу мөмкинлеге бар.**

Өфө - бай, төҙөк, бар яҡлап та үçеш юлынан атлаусы ҡала. Ҡаланың тышҡы һәм эске йөҙөнә ҙур иғтибар бирелә, төҙөлөш, йәшелләндереү эштәре күпләп алып барыла. Бөгөнгө Өфөлә һаулыҡ нығытыу өсөн төрлө спорт һәм фитнес үҙәктәр ҙә, рухи үçеште күҙаллаған мәҙәни усаҡтар ҙа күп. Шулай уҡ ҙур магазиндарҙың күпләп асылыуы ла ыңғай күренеш, сөнки был конкурентлыҡ тыуҙыра һәм һатып алыусыны йәлеп итеү маҡсатында тауар ассортиментына ла, сифатҡа ла талап арта, тигән һүҙ.

Шулай уҡ һуңғы йылдарҙа Телеүҙәк янында булған үҙгәрештәр һөйөндөрә. Элек Салауат һәйкәле янына килеүселәргә ял итеү өсөн уңайлыҡтар әҙ булһа, бөгөн унда күпләп эскәмйәләр урынлаштырылыуы, юлдарҙың яңыртылыуы, иç киткес матур фонтан эшләнеүе, заманса фонарҙар ҡуйылыуы - барыһы ла кешене үҙенә тартып тора. Тағы ла Конгресс-холл бинаһының был тирәгә айырым бер күркәмлек өçтәй икәнлеге менән дә күптәр ризалашыр.

Ләкин проблемалар ҙа юҡ түгел. Мәçәлән, йәйәүлеләр өсөн тәғәйенләнгән юлдарҙы алып ҡарайыҡ. Эләкмәй-йығылмайынса Ленин урамы башында, парктарҙа һәм Салауат һәйкәле янында ғына йөрөргә мөмкин, ә башҡа ерҙәге тротуарҙар хаҡында, ҡыҙғанысҡа күрә, һәйбәт һүҙ әйтеп булмай. Бейек үксәле туфли кейеп, торлаҡ йорттар араһындағы юлдарҙан йөрөгән ҡатын-ҡыҙға, ғөмүмән, һәйкәл ҡуйырлыҡ, сөнки унда хатта спорт аяҡ кейемендә йөрөүе лә ауыр. Шулай уҡ был юлдарҙағы соҡор-саҡырҙар бәләкәс балалар һаулығы өсөн дә хәүефле, тип уйлайым. Тағы ла күңелде ҡырған бер күренеш: күп ҡатлы йорттар араһында урынлашҡан төрлө төçтәге, әллә нимәләр яҙылып бөткән гараждарҙың күплеге. Әлбиттә, уларҙы бөтөнләй алыу мөмкинлеге юҡтыр, сөнки кеше ҡайҙалыр машинаһын ҡуйырға тейеш, ләкин бер урында тупланған гараждарҙы бер төрлөрәк итеп буяу-рәтләү талабын ҡуйыу мөмкиндер, тигән фекерҙәмен.

Шулай уҡ шәхсән миндә Өфөнөң тарихи үҙәгендәге йорттарҙы емереп ташлау ҙа ҙур ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Ул йорттар үҙенә әллә күпме тарих һыйҙырған, әллә күпме быуын һәм төрлө кеше яҙмышын туплаған, әллә нисәмә ваҡиғаға шаһит булған! Шуға күрә, миненсә, ундай йорттарҙың барыһын да һүтергә түгел, ә тышҡы йөҙөнә реставрация яһап ултыртырға кәрәк. Элекке Фрунзе, хәҙерге Зәки Вәлиди урамындағы бындай йорттар емерелеп бөткән тиерлек, ләкин Октябрь революцияһындағы йорттарға теймәһендәр ине, тигән теләк бар. Шулай уҡ нәҡ ошо урамды йәйәүлеләр өсөн генә тәғәйенләнгән урам итеп үҙгәртеүҙе ҡуш ҡуллап яҡлайым, сөнки бында тарих менән хәҙерге заман бәйләнеше көслө.

**Резида ФАЗЛЕТДИНОВА.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, әйҙәгеҙ, ошо теманы дауам итеп, баш йортобоҙ Өфөләге үҙегеҙгә оҡшаған һәм оҡшамаған күренештәр, урындар, шулай уҡ өфөлөләрҙең тәртибе, үҙ-ара мөнәсәбәттәре тураһында яҙып ебәрегеҙ әле. Һеҙҙең фекерҙәр, тәҡдимдәр гәзитебеҙҙең һәр һанында "Баш йортта..." тигән рубрикала даими урын аласаҡ. Хаттар, шылтыратыуҙар көтәбеҙ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Беҙҙең бөтә бәләләребеҙҙең башы битарафлығыбыҙҙа түгелме?

**(Башы 1-се биттә).**

***Камила БАЯЗИТОВА, Әлшәй районы Ибрай ауылы:*** Һорау урынлы ҡуйыла. Эйе, бөтә бәләләребеҙ битарафлыҡтан килә. Ана шул битрафлыҡ арҡаһында берҙән-бер байлығыбыҙ - еребеҙҙән дә яҙып барабыҙ. 14 мартта "Юлдаш" радиоканалындағы бер тапшырыуҙа: "Әлшәй районында ерҙәр һатылып бөткән, ауылдар халҡына мал көтөргә лә урын ҡалмаған", - тигән һүҙҙәр яңғырағайны. Ысынлап та, мин быны үҙебеҙҙең Ибрай ауылы миçалында ла раçлай алам. Ауылыбыҙҙан саҡрым ярым самаһы урында ғына ситтән ниндәйҙер инвестор килеп, тауыҡ фермаһы төҙөп ята. Мине борсоғаны - ул ферма тирә-яҡ мөхитебеҙҙе һәм бигерәк тә Дим йылғаһын бысратасаҡ. Урындағы шәкәр заводының етештереү ҡалдыҡтары ағып төшөп, Дим былай ҙа ныҡ ҡына бысратыла, хәҙер инде тауыҡ фермаһы ла өçтәһә... Ферма бит йылғаны ғына бысратып ҡалмаясаҡ: еребеҙ ҙә ҡулланыуға яраҡһыҙ булып ҡаласаҡ, һауабыҙ ҙа һуларлыҡ булмаясаҡ. Заманында Йоматау шифаханаһының яңы корпусын төҙөүҙә ҡатнашҡан кеше булараҡ, әйтә алам: унан 15 саҡрымда ятҡан Авдон ҡошсолоҡ фермаһының "хуш еçе" танауҙы ярып килә торғайны. Ә бында ферма ауылға терәтеп тигәндәй төҙөлә һәм...бер кем бер ни өндәшмәй. Халыҡ менән һөйләшә башлаһаң, шул асыҡлана: кемдер эштән бушатылырҙар тип, кемдер бала-сағаһы, үҙ хәүефһеҙлеге өсөн ҡурҡа, ә кемдер, ғөмүмән, битараф: бөгөн йәшәһә, иртәгәһен ишәк ҡайғыртһын, тип барыһына ла ҡул һелтәгән. Ана шул битарафлыҡ арҡаһында район хакимиәтенең элекке башлығы Фәнил Вилданов төҙөткән һәм гөрләп эшләп торған май, сыр, икмәк заводтары юҡҡа сыҡты ла инде. Ауылға зыяндан башҡа бер ни килтермәйәсәк тауыҡ фермаһына ҡарағанда, әлеге ошо заводтарҙы тергеҙеү эш урыны ла, таҙа ризыҡ та, өçтәмә килем дә бирер ине...

Өфөнән күсеп ҡайтыуыма һигеҙ йыл инде, шунан бирле ауылымда тәртип, таҙалыҡ өсөн бер үҙемә тиерлек көрәшергә тура килә. Ҡайҙа етте - шунда сүп түгәләр, зыярат ташландыҡ хәлдә ине. Эште шунан башларға тура килде. 40-лап кеше йыйылдыҡ та зыяратты таҙарттыҡ: 6 йөк ҡый, сүп-сар сығарып түктек. Ауыл халҡынан аҡса йыйҙым, кәрәкле материалдар һатып алдым. Хәҙер зыяратты кәртәләп, буяп, төҙөкләндереү эшенә тотонмаҡсыбыҙ.

***Ғарифулла ИШБИРҘИН, һуғыш һәм хеҙмәт ветераны:*** Мине йәш һәм урта быуын вәкилдәренең үҙ сәләмәтлектәренә генә түгел, хатта ғүмерҙәренә битарафлығы аптырата. Бөгөнгө көндә мин үҙәк гәзиттәрҙе асып ҡарарға, телевизор тоҡандырырға ла ҡурҡыбыраҡ торам: һәр һанда, һәр тапшырыуҙа, суицид "эпидемияһы", ти ҙә хәбәр ҡуйырталар. Йәнәһе лә, замана касафаты, тормош ауырлығына сыҙамайҙар, имеш. Һәм ошо сәбәп арҡаһында уйлап та тормай, Аллаһы Тәғәлә бүләк иткән иң изге, иң ҡәҙерле нәмә - ғүмерең менән хушлашсәле... Беҙ, өлкән быуын, аңлай торған фәлсәфә түгел был. Тормош ҡасан еңел булды һуң, йә, әйтегеҙ әле? Беҙҙең бала саҡ һәм үçмер йылдары ғәрәсәтле һуғыш йылдарына тура килде - шулмы еңел булды? Дөрөç, беҙ эштән бушаманыҡ, шуға ла үҙ-үҙеңә ҡул һалыу кеүек яҙыҡ, гонаһ уй башҡа ла инеп сыҡмай ине, суицид тигән һүҙ ҙә булманы. Хәҙер ҙә бит эшләйем тигән кешегә юлды бәрәү ҙә бикләп ҡуймаған. Бөгөн бер гәзиттән бөтөнләй икенсе йөкмәткеле мәҡәлә уҡып ҡыуандым: баҙарҙа сумка, футболкалар һатып эш башлап ебәргән бер егет хәҙер күренекле генә эшҡыуар булып киткән, тик ул изгелекле Хоҙай бәндәһе булып сыға, капиталын сит ил банкыларына йәшереп һалып ҡуймай, ә сиркәүҙәр төҙөргә бирә, ғәрип-ғөрәбәгә ярҙам итә. Балаһы ла, үҙе лә инвалид булған Силәбелә йәшәгән бер яңғыҙ әсәгә ошо эшҡыуар әллә ҡайҙағы Мурманскиҙан үҙе килеп, ике бүлмәле фатир һатып алып бирә. Силәбенең кеше яҙмышына битараф түрәләренә ниндәйен дә һабаҡ була ул! Хәйер, ябай халыҡ тормошона битараф чиновниктар беҙҙең үҙебеҙҙә лә кабинет һайын. Бөтәбеҙгә лә мәрхәмәтле эшҡыуар ярҙам итеп бөтә алмаç — бер-беребеҙгә битараф булмайыҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА әҙерләне.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!




Гәзитебеҙҙе йыл да алдырған, уға ваҡытында яҙылған, уны аҙна һайын ҡәҙерле ҡунағылай көтөп алған тоғро уҡыусыларыбыҙ барлығын беләбеҙ һәм улар иғтибарына шуны еткерәбеҙ: март айында ла 2012 йылдың тәүге яртыһындағы хаҡ менән **(348 һум 24 тин)** 2012 йылдың икенсе яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып була әле. **Мартта гәзиткә яҙылған, квитанцияһын редакциябыҙға ебәргән ике уҡыусыбыҙ — башҡортса "Ҡөрьән-Кәрим", өс уҡыусы "400 башҡорт халыҡ йыры" китабына эйә буласаҡ.**

**Һәм тағы.** Эргә-тирәгеҙҙә, таныш-тоноштарығыҙ араһында теге йәки был сәбәп арҡаһында гәзиткә яҙылып өлгөрмәй ҡалғандар ҙа барҙыр. Уларҙы исҡәртегеҙсе: 17 апрелгә тиклем яҙылһалар, майҙан өйҙәренә тағы килә башлар "Киске Өфө". Индексы - 50665. Ике айға яҙылыу хаҡы - 116 һум 08 тин.

**Әйткәндәй,** почталар менән гәзиткә яҙҙырыу һәм гәзитте өйҙәргә килтереү буйынса аңлашылмаусылыҡтар килеп тыуһа, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итергә онотмағыҙ.

Беҙҙең сайт: **kiskeufa.ru**, электрон почта: **info@kiskeufa.ru**, **kiskeufa@ufacom.ru**, блог: **blog.kiskeufa.ru**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Хөкүмәте менән "Башнефть" акционерҙар нефть компанияһы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте араһында ҡул ҡуйылған килешеүгә ярашлы, республика аграрийҙары яҙғы сәсеү осоронда льготалы хаҡ менән 48,66 мең тонна дизель яғыулығы һәм 2 мең тонна "Нормаль-80" автобензины аласаҡ. Льготалы яғыулыҡ марттан июнгә тиклем бирелә. Былтыр беҙҙең ауыл хужалығы хеҙмәтсәндәре ошондай ташламалар арҡаһында 800 миллион һумдан ашыу аҡса экономиялағайны.

✓Республика етәкселеге Рәсәй Хөкүмәтенә яңы корпус төҙөү тураһында тәҡдим менән сығып, Владимир Путиндан был мәсьәлә буйынса яҡлау тапҡан. БР Президенты Рөстәм Хәмитов был объектты Федераль маҡсатлы программаға индереү тураһында үтенес менән уға махсус мөрәжәғәт иткән. Владимир Путин республика Хөкүмәтенә тейешле күрһәтмә биргән һәм уның үтәлешен үҙ контроле аçтына алған.

✓Өфөнөң Ҡала мәҙәниәт һарайында XVIII "Күсемһеҙ милек. Яҙ-2012" күргәҙмә-йәрминкәһе асылды. Уның төп экспоненттары - торлаҡ йорттар һәм коттедж ҡасабалары төҙөүсе эре компаниялар. Улар ипотека кредитлауы буйынса яңы продукттар һәм торлаҡ һатып алыу өсөн башҡа инструменттар тәҡдим итә. Бынан тыш, күргәҙмәлә сит илдәрҙең күсемһеҙ милек баҙары вәкилдәре - Төркиәнән, Таиландтан, Болгариянан төҙөлөш менән шөғөлләнеүсе компаниялар әүҙем ҡатнаша.

✓Башҡортостан халҡы өсөн Науруз байрамы 14 апрелдә Өфөнөң И.Якутов исемендәге паркында үткәреләсәк. Науруз үҙе 21 мартта үтте. Һауа шарттары арҡаһында ул йылыраҡ ваҡытҡа күсерелгән. Был байрамда өс тарихи-мәҙәни үҙәк ("Темәс" һәм "Сәйетбаба" башҡорт үҙәктәре, "Килем" татар үҙәге) һәм башҡа милли-мәҙәни үҙәктәр (улар исәбендә төркмән, ҡырғыҙ, ҡаҙаҡ, үзбәк, тажик, әзербайжан, дағстан үҙәктәре) үҙ майҙансыҡтарын ойошторорға теләк белдергән.

✓Бөгөн Ғафури районы Сәйетбаба ауылында милли көрәш буйынса район-ара турнир үткәреләсәк. Сараны Ғафури районы хакимиәте, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ойоштора. Сара сиктәрендә Ауырғазы, Архангел, Ғафури, Дәүләкән, Ишембай, Ҡырмыçҡалы һәм Шишмә райондары мәктәптәренә көрәш менән шөғөлләнеү өсөн келәмдәр алыуға сертификаттар тапшырыу тантанаһы үтәсәк.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ЯТ ЯРЛЫҠАМАЙ,

## үҙендеке үлтермәй



**Үҙенең мәғәнә тығыҙлығы, фекер ҡоласлығы һәм тарихи тәрәнлеге менән был мәҡәл башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре араһында айырыуса мөһим урынды алып торалыр ул. Урыҫтарҙың "Бей своих, чтобы чужие боялись" тигән әйтеме лә бар барлыҡҡа, әммә ундағы мәғәнә икенсерәк, йәғни бер яҡлы ғына маҡсатты (ситтәрҙе ҡурҡытыу өсөн үҙендекеләрҙе ҡыйырлау) аңлата кеүек. Ә инде "Ят ярлыҡамай, үҙендеке үлтермәй" тигән һүҙҙәр милләтте һәм кешелекте берләштереүсе программа, милли идея ла була ала, минеңсә.**

Күренекле шағир, ғалим, философ Рәйес Түләк ғүмеренең һуңғы йылдарында Көнсығыш әҙәбиәтенең сағыу үрнәктәрен ентекләп өйрәнде һәм йыш ҡына улар менән һокланыуын белдерә торғайны. Үҙе лә ижад елкәнен шул йүнәлешкә бора башлағайны Рәйес. Был ағым бигерәк тә уның фекерҙәр тынҡыслап тултырылған фәлсәфәүи уйланыуҙарында, башлыса, гәзит мәҡәләләрендә сағылыш тапты. Уның ошондай рухтағы мәҡәләләре "Башҡортостан" гәзитендә һәм беҙҙең баҫмала "Класс сәғәте" рубрикаһында донъя күрҙе. Үкенескә күрә, уның романдарға, поэмаларға нигеҙ булырлыҡ күп кенә фекер-идеялары ошондай мәҡәләләрендә тезис рәүешендә генә теркәлеп ҡалды, ундай типтағы әҙәби әҫәрҙәрен ул яҙып өлгөрмәне. Һәр хәлдә, уның һуңғы йылдарҙа яҙылған шиғырҙары бындай башланғыс хаҡында һөйөнсөләп өлгөргәйне. Уның бар донъяһын онотоп, үҙе һөйләгәненә үҙе ҡыуанып, бейей-бейей бәйән иткән бер әҫәрҙең (япон авторы ине шикелле) сюжеты күңелгә нык һеңеп ҡалған.

...Ағалы-ҡустылы ике һунарсы бейек тау-ҡаялар аша ауҙан ҡайтып килгәнендә көтмәгәндә дауыл ҡуба. Ҡапыл сыҡҡан ғәрәсәт тулҡыны һунарсыларҙың кесеһен упҡынға тәгәрәтә һуға. Әммә йылғыр һунарсы упҡынға осоп барышлай һерәйеп торған ташҡа тотоноп өлгөрә һәм упҡын өҫтөндә аҫылынып тороп ҡала. Һулыш алған һайын, хәле бөтөп, ана ысҡына, бына упҡынға йәнселә тип торған ҡустыһы өсөн борсолоп, йәнен ҡайҙа ҡуйырға белмәгән ағаһы уға өҫтән:

- Ҡустым, зинһар өсөн бер аҙға ғына түҙ, ауылға күп ҡалманы бит. Мин йүгереп ҡайтып арҡан алып киләм дә, һине һөйрәп сығарам. Бар көсөңдө йый ҙа, түҙ, бирешмә, йәме! - тип ҡысҡырған.

- Юҡ, ағай, ҡулдарым ҡатты инде, бер минут та тора алмам. Хәлем етмәҫ. Ярар, бәхил бул, тик балаларымды етем итмә, - тип илаулап ялбарған ҡустыһы ағаһына.

- Һе, һин ул балаларыңды үҙеңдеке тиһеңме? Яңылышаһың... Белгең килһә, беҙ килен менән әллә ҡасандан... Ҡыҫҡаһы, балаларың барыһы ла минеке...

Шулай тигән дә, ағай кеше йәһәт кенә ҡаянан ергә төшөп, ауыл яғына йән-фарман йүгергән. Күп тә үтмәҫтән, ул кире килеп тә еткән һәм үҙе менән алып килгән арҡанын ташлап, ҡустыһын өҫкә һөйрәп сығарған. Ҡустыһы ҡая башына күтәрелеп баҫыуы булған, ағаһын ҡаянан һуғып та осорған. Упҡынға табан осоп барған ағаһының ул "Эх, ҡустым, мин бит һине сәмләндерергә генә теләгәйнем!" тигән һүҙҙәрен генә ишеткән, әммә ағаһын ҡотҡарыр өсөн нимәлер эшләргә бик һуң булған. Ә ағаһы упҡынға барып йәнселеп йән биргән.

Бер уйлағанда, сәмләнеүҙең, намыҫланыуҙың, экстремаль хәлдә әйтелгән һүҙҙең кеше өсөн ниндәй көскә эйә булыуы хаҡында кеүек был әҫәр сюжеты. Ысынлап та, ҡаяла аҫылынып тороп, тамам хәлһеҙләнгән һунарсыла ағаһының көтөлмәгәндә әйтелгән был һүҙҙәре тетрәткес йөгөнто яһай һәм уның тәбиғәтенә һалынған көстә нәфрәт, сәм тойғоһо аша уята. Шул көс уны әжәлдән ҡотҡара. Ғалимдар раҫлауынса, кеше үҙенә һалынған физик көстөң - 10, интеллектуаль көстөң 3 кенә процентын файҙалана һәм кеше үҙенең тағы 1 процент ҡына интеллектуаль көсөн уята алһа - даһиға, 1 процент ҡына физик көсөн уята алһа батырға әүерелә ала. Юғарыла килтерелгән был ғибрәтле ваҡиғала ғүмеренә ҡурҡыныс янағанда кеше сәмләнеп, намыҫланып, артабан йәшәрлек көс таба ала үҙендә, тигән фекер әйтелә.

Әммә был фекер миҙалдың бер яғы ғына булырға оҡшаған. Уның икенсе, күптәргә күренмәгән яғына ла иғтибар итәйек, йәғни ошо уҡ көсөргәнешле хәлгә өҫтәге һунарсы, бер туған ағай кеше күҙлегенән ҡарайыҡ. Әгәр ҙә упҡын өҫтөндә аҫылынып тороусы уның бер туған ҡустыһы булмаһа, ул ошо һүҙҙәрҙе әйтер инеме икән? Юҡтыр. Улай ғына ла түгел, ғөмүмән, шул бер-нисә секунд арауығында уның башына шундайын ( бәләгә тарыусының ҡатыны менән мөнәсәбәт һәм шул мөнәсәбәттән тыуған балалар хаҡындағы ) уй-фекер килер инеме икән? Ай-һай, ундай ваҡытта кеше шундай нескәлектәргә ҡоролған йәшерен мөнәсәбәт хаҡында уйлай аламы икән? Ә бит, төптән уйлап ҡараһаң, экстремаль хәл был осраҡта упҡын өҫтөндә аҫылынып торған һунарсыға физик һәләкәт менән янаһа, уның ағаһы өсөн интеллектуаль, рухи һәләкәт менән янаған. Бизмәнгә һалһаң, уларҙың ҡайһыһы ауырыраҡ икән? Хәйер, "Үлгәнгә ҡыйын түгел, йән биреүе генә ҡыйын, ә ҡалғанға ауыр", тиҙәр бындай осраҡта. Тимәк, ҡустыһының ғүмеренә ошондай ҡурҡыныс-һәләкәт менән янаған ситуацияла икеләтә тетрәнеү кисергән ағаһының бая беҙ әйткән 1 процент интеллектуаль көсө уянып, бер нисә секунд эсендә ҡустыһын ҡотҡарыуҙың иң дөрөҫ юлын табырға ярҙам итеп, уны "даһиға" әүерелдергән. Йәғни, кәрәк мәлдә аҫҡы аңдан иң кәрәкле исулмәғлүмәтте һөйрәп сығарҡан. Әгәр ҙә бәләгә тарыусы өҫтә тороусының ҡандаш туғаны булмаһа, аҫҡы аңда бындай мәғлүмәт кешенең ғүмерен ҡотҡарыуҙың "берҙән-бер ысулы" була алыр инеме? Ағай кеше килене менән булмаған был тарихты уйлап та сығарып өлгөрмәҫ ине, бары тик был мәғлүмәтте ниндәй генә юл менән булһа ла туғаныңды һаҡлап ҡалырға ынтылыу теләге үҙенән-үҙе барлыҡҡа килтергән тип уйларға ла урын ҡала бында. Ни тиһәң дә, даһилыҡ менән батырлыҡ бер туған бит инде, шуға күрә лә был осраҡта ағай кешелә уянған "даһилыҡ" һуңғы сиктә ҡустыһындағы "батырлыҡты" хәрәкәткә килтергән, йәғни интеллект физик көскә йөгөнто яһаған.

"Ят ярлыҡамай, үҙендеке үлтермәй" мәҡәләненең аң менән аңлап булмаған, бары тик ҡан яҡынлығы менән генә иҫбат ителгән мәғәнәһе тап ошо рәүешле кешенең аҫҡы аңында ғына серем итеп ятаһыр ҙа, экстремаль ситуацияла хәрәкәткә килеп, туғандарҙы берҙәм итәлер, тип уйланыла. Йөк машинаһы менән аварияға эләккәндә түңкәрелгән машинаны күтәреп, балаһын һаҡлап ҡалған әсәнең дә бындай көстө ҡайҙан табыуы бер аҙ аңлашыла төшә бында. Мәҡәлдең өҫтә генә ятҡан мәғәнәһе яп-ябай, ят, ысынлап та, һине ғәфү итмәй, ярлыҡамай, ә үҙендеке, хатта һине күрәлмаҫтай хәлгә еткәндә лә, ғүмереңә ҡурҡыныс янағанда иң беренсе булып ярҙамға ташлана, хатта үҙе теләмәгән осраҡта ла ҡан саҡырыуы буйынса ошо аҙымды яһай.

Ҡан яҡынлығы хатта рухи яҡынлыҡтан да көслөрәктер. Әгәр ҙә инде был ике тойғо бергә ҡушылһа, ундай йәнәшәлектән ҡатыраҡ берәмек юҡтыр донъяла. Беҙҙең милләт башҡа боронғо милләттәр кеүек үк ҡан яҡынлығы менән дә көслө булған. Мин йыш ҡына ырыу шәжәрәһенең элек ни өсөн оло сер итеп, күҙ ҡараһындай йәшереп һаҡланыуының сәбәбе хаҡында уйланғаным булды. Миненсә, был күренеш туғанлыҡтың гәзиз булыуынан килә торғандыр. Дошмандар тарафынан ҡырылып, нәҫелдең юҡҡа сығыуынан һаҡланыу маҡсатында аҡһаҡалдар туғанлыҡ ебен сер һандыҡтарына йәшергәндәр, тип уйланыла.

Һуңғы йылдарҙа Мәскәү үткәргән власть вертикале сәйәсәте арҡаһында беҙ үткән быуаттың 90-сы йылдарында яулаған күп кенә позицияларыбыҙҙы юғалттыҡ. Власть милләттең хоҡуҡтарын нисек кенә инҡар итергә тырышмаһын, ул туғанлыҡ, зат, ара, ғаилә мөнәсәбәттәренә ҡыҫыла алмаясаҡ. Был тәңгәлдә уйланғанда, Аллаға шөкөр беҙҙә әлегә туғанлыҡ тойғоһо. Чечендар, мәҫәлән, үҙҙәренең милләтенә ҡарағанда, тейпын (беҙҙәнсә зат, ара, тайфа) яҡыныраҡ күрә һәм бының менән яңылышмайҙыр, тием. Кешелекте яратыуы еңел ул, бер кешене яратып ҡара, милләтеңде яратыуы ла еңел, һин туғаныңды яратып ҡара.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓"Мир" дәүләт-ара телерадиокомпанияһы журналистары "Башҡортостан ауылдары айыҡлыҡ буйынса көс һынаша" исемле тапшырыу әҙерләгән. Сюжет әҙерләү өсөн улар февраль аҙағында Әбйәлил районына килеп, Ҡырҙас һәм Ишбулды ауылдарында материал туплаған, урындағы халыҡ, имамдар, ауыл советтары башлыҡтары менән аралашҡан. Шулай уҡ улар Сибай ҡала округына ҡараған Төйәләҫ ауылында ла булған. Тапшырыу ошо көндәрҙә эфирға сыҡты. Уны "Мир" дәүләт-ара телерадиокомпанияһы сайтында ҡарарға була. Башҡортостандың айыҡ ауылдары тураһында видеорепортаждар йыл дауамында НТВ, ТВЦ кеүек дөйөм федераль каналдарҙа ла күрһәтелде.

✓2012 йылда БР Мәғариф министрлығы мәғлүмәттәре буйынса мәктәп уҡыусылары Бөтә Рәсәй олимпиадаһының һуңғы этабына олимпиадаһының төбәк этабы еңеүселәре һәм призерҙары - йәмғеһе 90 кеше үтте. Сара финалы 24 марттан 29 апрелгә тиклем илдең 15 ҡалаһында үтәсәк. Былтыр илдең төп интеллектуаль бәйгеһе финалына 104 уҡыусы үткәйне, уларҙан 24 кеше - призер, етәүһе еңеүсе булды.

✓Әле республиканың мәшғүллек хеҙмәттәрендә иҫәптә торғандарҙың 40 проценты - ауыл кешеләре. Башҡортостанда 31 меңгә яҡын эшһеҙ иҫәпләнә, шуларҙың 59 проценты - ҡатын-ҡыҙҙар. Республикала эшһеҙҙәрҙең 24 проценттан ашыуын 16-29 йәштәгеләр тәшкил итә, пенсия алды йәшендәгеләргә - туғыҙ процент, инвалидтарға ете процент тура килә. Рәсми теркәлгән эшһеҙҙәрҙең яртыһы тиерлек үҙ теләге буйынса эштән киткәндәр, 20 процент самаһын ойошма ябылыу йәки хеҙмәткәрҙәр штаты ҡыҫҡартылыу арҡаһында эшһеҙ ҡалғандар тәшкил итә.

✓Башҡортостанда 2012 йылдың 29 һәм 30 апреле, 1, 6 һәм 7, 8, 9 май ял көндәре булып тора. Шәмбе көндәрендә, 28 апрелдә һәм 12 майҙа, эш көнө оҙайлығы бер сәғәткә ҡыҫҡартыла. РФ Хеҙмәт кодексының 120-се статьяһы нигеҙендә йыллыҡ төп һәм йыллыҡ өҫтәмә түләүле отпуск биргәндә 1 һәм 9 майҙағы ял һәм байрам көндәре отпускыһын календарь көндәренә индерелмәй.

✓**28 марта "Нефтсе" мәҙәниәт һарайында билдәле шағир, ғалим, йәмәғәт эшмәкәре Рәшит Шәкүрҙең 75 йәшлек юбилейына арналған ижад кисәһе үткәрелә. Башлана 19 сәғәттә.**

**"Башинформ"дан.**

ДОНЪЯ ШАУҠЫМЫ



# ЙӘШЕЛ АҠСА - ТАУАР ҒЫНА...

**Ҡайһы бер эксперттар билдәләүенсә, донъя иҡтисады емерелеүенең беренсе һәм иң мөһим сәбәбе - ул долларҙың артыҡ етештерелеүе.**

1944 йылда Бреттон-Вудс килешеүе төҙөлә. Был килешеүгә ярашлы, донъя валюталары - АҠШ долларына, ә доллар үҙе алтынға тиңләштерелә. Һәр валюта алтынға ҡарата аныҡ билдәле хаҡҡа эйә була һәм валютаны алтынға алыштырыуҙың курсы билдәләнә. Йәғни башҡа илдәрҙең Үҙәк банктары формаль рәүештә үҙҙәрендә булған долларҙы алтынға әйләндереүҙе талап итеү хоҡуғы ала. Ә бынан 40 йылдар элек иһә долларҙың алтынға тиңләштерелеүе юҡҡа сығарыла һәм доллар бик ҙур күләмдә баҫыла башлай. Нәк ошо хәл, эксперттар фекеренсә, 2008 йыл көрсөгөнә юл асыусы булып тора ла инде, сөнки долларҙың ҡеүәтен тәьмин итеүсе илдәр Америка аҡсаһының эмиссия (әйләнешкә сығарылған ҡағыҙ аҡсалар) күләмен контролдә тота алмай. Әйтергә кәрәк, хатта АҠШ Хөкүмәте лә бындай мөмкинлеккә эйә түгел. Ундай хоҡуҡ менән бары тик АҠШ-тың Федераль Резерв Фонды ғына ҡуллана ала. Нимә ул Федераль Резерв Фонд? Ул 20 шәхси банкты үҙ эсенә алған шәхси ойошма һәм уларҙың төп бизнесы - бөтә донъя валютаһын, йәғни доллар етештереү. Ошо хоҡуҡҡа эйә булыу өсөн ФРФ хужалары оҙаҡ йылдар эш алып бара һәм 1907 йылда ошо Фондты төҙөүгә өлгәшә. Шулай итеп, бәләкәй генә төркөм бөтә донъя валютаһы өҫтөнән хакимлыҡ ала, тип әйтергә була.

1971-2008 йылдарҙа Фонд тарафынан донъялағы бөтә тауарҙың ысынбарлыҡтағы хаҡынан күпкә артып киткән күләмдә доллар баҫып сығарыла (йәғни аҡса күп, ә ысынбарлыҡта шул суммаға һатып алырлыҡ тауар юҡ), сөнки был ФРФ-ҡа ла, АҠШ-ҡа ла ҡулай була. Йәғни ошо йылдар эсендә Америка башҡа илдәр иҫәбенә йәшәне, тип әйтергә була. Ни өсөнмө? Сөнки АҠШ Бөтә донъя Тулайым эске продукттың 20 процентын ғына етештерә, ләкин шул уҡ ваҡытта 40 процентын "ашай", ҡуллана. Тимәк, әҙ етештерә, ә күп тотона, ул - ҡулланыусы. Ә бынең өсөн кем түләй? Яуап ябай: бөтә донъя түләй, йәғни донъяның барлыҡ илдәре үҙҙәрендәге реаль хаҡы булған тауарҙы, күпләп баҫып сығарылған, ләкин бер нәмә менән дә тәьмин ителмәгән буш ҡағыҙға - долларға һата. Нимә ул доллар? Ул - ябай тауар һәм, әйтеп китергә кәрәк, бер генә һатыусының тауары. Долларҙы күпләп сығарыу бер маҡсатты ғына күҙ уңында тота: байыуы.

ФРФ - ул мейе һәм, әлбиттә, уға көслө һәм ғәйрәтле кәүҙә кәрәк. ФРФ өсөн ошондай кәүҙә ролен нәк Америка үтәй. Шуға ла ошо йылдар эсендә Америкала иң алдынғы иҡтисад һәм көслә армия булдырыуға, илде барыһына ҡарағанда ла һәйбәтерәк йәшәтеүгә һәм Америка халҡына күпләп ҡулланыусылар кредиты алыу мөмкинлеген тәьмин итеүгә иҫ киткес ҙур суммала аҡса тотонола. Шул уҡ ваҡытта был кредиттарҙың күпселек өлөшө ҡасан да булһа иҡтисади көрсөк арҡаһында "юйыласаҡ" икәнлеген ФРФ алдан белеп эш итте. Эш бары тик ул көрсөктө көтөүгә генә ҡайтып ҡалды. Һәм ул килде. Килде лә бар донъя иҡтисадына ҙур бәлә килтерҙе.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ҡайһы берәүҙәрҙең "Бына доллар бөтһә, барыһы ла һәйбәт буласаҡ", тип фекерләүе, көмендә, бер ҡатлылыҡ кеүек күренә, сөнки мейегә яңы кәүҙә табыу бер ауырлыҡ та тыуҙырмай. Ә уның өсөн ниндәй ил һәм ниндәй валюта һайланасағы, күрәһең, мейегә күптән билдәле.**

Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ



**Ошо һорауға яуап эҙләшергә тип, Өфө районы Шамонин ауылы дөйөм белем биреү мәктәбенең беренсе синыф уҡыусылары ата-әсәләрҙе, өлкәндәрҙе үҙҙәренә ҡунаҡҡа саҡырҙы.**

# БЕЛМӘҪЙӘН АЙҒА ОСОРМО?

Әле генә был балалар өсөн тәүге ҡыңғырау сыңлағайны, шул арала ярты йылдан ашыу ваҡыт үтеп тә киткән икән. Ләкин ул һәҙөмтәһеҙ үтмәгән, балалар ошо арауыҡта уҡырға, яҙырға, һанарға ғына түгел, яңы йырҙар, бейеүҙәр өйрәнгән. "Әлифба" байрамы" улар өсөн бер ни тиклем имтихан да булып торҙо: балалар уҡытыусылары алдында ғына түгел, ата-әсәләр, саҡырылған ҡунаҡтар, балалар баҡсаһынан үҙҙәренең үксәһенә баҫып килеүсе төркөм алдында барлыҡ һөнәрҙәрен күрһәтте. Хатта башҡорт синыфы булһа ла, бында тик башҡорт балалары ғына белем алмай, башҡа милләт вәкилдәре лә бар. Синыфтағы 15 баланың 9-ы - башҡорт, ҡалғандары башҡа милләттәр. Улар ҙа тырышып-тырышып башҡорт телен өйрәнә һәм башҡортса шиғырҙар һөйләй, башҡортса йырлай, тиҫтерҙәренән һис ҡалышырға теләмәй. Ә балаларҙы белем үрәнә 18 йыллыҡ педагог стажы булған Фәнилә Хәйруллина әйҙәй. Ана бит, уның тәрбиәләнеүселәре:

*Әлифба, һин барлыҡ фәндең,*
*Белем аҫкысы.*
*Һин кәҙерле туған телдең*
*Алтын баҫҡысы,* - тип, алтын аҫкыстың да, алтын баҫкыстың ла серен аҫҡан. Ләкин улар араһындағы Белмәҫйән генә бер нәмә лә белмәгәне өсөн һаман йыһанға оса алмай йөрөй. Шуға ла хәҙер инде күп нәмәне белгән беренсе синыф уҡыусылары уға ысын күңелдән ярҙам итергә булды. Балалар Белермәндең йомаҡтарына ла, Ҡабартманың һорауҙарына ла, башҡа геройҙарҙың башватҡыстарына ла шартлатып яуап бирепп, Белмәҫйәнгә Айға осоу мөмкинлеген бирҙе. Ярҙам иттеләр ҙә ул, тик күңелдәрҙә генә бер аҙ моңһоулыҡ билеп алды - Белмәҫйән дә, "Әлифба" ла уларҙы ҡалдырып китте... Әммә юҡҡа борсолған икән балалар, "Әлифба" үҙенә алмашҡа "Туған тел" китабын ҡалдырған бит. Тимәк, киләсәктә башҡорт синыфы уҡыусыларын бай ҙа, тәрән дә, киң дә, серле лә әсә теленә сәйәхәт көтә.

Балаларҙың башҡорт телендә белем алыуын мәктәп директоры Рәшиҙә Мостафина ла хуплап: "Мәктәп асылғандан алып башҡорт синыфтары эшләй. Быйыл да, Алла бойорһа, яңы килгән беренселәргә башҡорт класы асаҫаҡбыҙ. Сөнки туған теле кешене юғары кимәлгә ҡуя, унан Тыуған илдең ысын гражданын формалаштырыуҙа ҙур роль уйнай. Балалар матур итеп башҡортса һөйләшһендәр, уны яратһындар, ҡәҙерләһендәр", - ти.

...Ә Белмәҫйән Айға остомо икән? Бәлки, бирелгән һорауҙарға яуап таба алмай, һеҙҙең арала йөрөп яталыр? Осраһағыҙ, уға Шамонин мәктәбенең беренсе синыф уҡыусылары китап кәштәһенә ҡәҙерләп һалып ҡуйған "Әлифба"ны тоттороғоҙ. Мотлаҡ уҡып сыҡһын, мотлаҡ Айға осор! Туған тел генә ошондай бейеклектәргә күтәрә кешене, тигән хәҡиҡәтте лә аңғартып ҡуйығыҙ уға.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ.

ЕТЕ РАЙОН

# РАЙОНДЫҢ...

## башҡорт донъяһы

**Баш ҡаланың Орджоникидзе районы ойошторолоуға 80 йыл тулған көндәрҙә район башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты эшенә лә бер аҙ күҙ һалып үтәйек.**



Ҡоролтайҙың мөһим эштәренең береһе, әлбиттә, районда йәшәгән башҡорт балаларын туған телгә, мәҙәниәткә йәлеп итеү, башҡорт теленең дәүләт теле булараҡ ҡулланыу даирәһен киңәйтеү саралары үткәреү. Был бурыстарҙы тормошҡа ашырыу мәктәптәрҙә, балалар баҡсаларында төбәкте өйрәнеүсе музейҙар ойоштороуҙан башланды. Маҡсат билдәле - үҙең йәшәгән республиканың, төбәктең тарихын белмәйенсә, унда йәшәгән төп халыҡтың мәҙәниәтенә, теленә, ғөрөф-ғәҙәттәренә ҡыҙыҡһыныу уятыуы ҡыйын. Районда биш йылдан артыҡ "Умырзая" башҡорт йәкшәмбе мәктәбе эшләп килә. Бында шөғөлләнеүсе балалар халыҡ музыка ҡоралдарында - ҡурайҙа, ҡумыҙҙа уйнарға өйрәнә, "Карға бутҡаһы", "Сөмбөлә байрамы", "Бәпес туйы" кеүек йолаларҙы сәхнәләштерә, милли байрамдар үткәрә. Шәжәрә байрамдарының уртаһында ла - улар. Шәжәрә байрамдары районда йәшәүсе башҡорттарҙың да, башҡа милләт вәкилдәренең дә үҙенең нәҫел шәжәрәһе менән ҡыҙыҡһыныуын көсәйтә икәне раҫ хәҙер. "Шәжәрә байрамы" конкурсының иң беренсе еңеүсеһе 48-се башҡорт лицейы уҡытыусыһы Игелекова 1863 йылда Баймаҡ районы Таулыҡай ауылында йәшәгән ғалим-мәғрифәтсе, дин әһеле Хәлил Мөхәммәтрәхим улы Әл Бөрйәниҙең шәжәрәһен тәҡдим итеп, байрамда ҡатнашыусыларҙы хайран ҡалдырғайны. 2009 йылғы

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә Мәрйәм Солтанова исемендәге Ислам колледжының яңы корпусы асылды. Яңы бина колледждың төп уҡыу корпусы янында урынлашҡан. Хәҙер колледждың кәрәкле заманса техника менән йыһазландырылған яңы уҡыу кластары, сит телдәр, шул иҫәптән ғәрәп телен өйрәнеү өсөн лингафон кабинеты, конференц-залы, ашханаһы, аҙыҡ-түлек һаҡлау һәм ризыҡ әҙерләү өсөн хужалыҡ бинаһары бар.

✓2012 йылдың 1 февраленән хеҙмәт пенсияларының страховка өлөшө ете процентҡа күтәрелгәйне. 1 апрелдән пенсияларҙы сираттағы индексациялау буласаҡ. Хеҙмәт пенсиялары - 3,4, социаль пенсиялар 14,1 процентҡа артасаҡ. Төрлө социаль льготаларға хоҡуғы булған граждандарға айлыҡ аҡсалата түләүҙәр күләме алты процентҡа артасаҡ. Февралдәге индексацианан һуң ҡартлыҡ буйынса хеҙмәт пенсияһының уртаса күләме Башҡортостанда 8900 һумға етте.

✓Башҡорт дәүләт университетында 2012 йылда "Геологик разведка технологияһы" тип аталған яңы һөнәргә уҡырға мөмкин буласаҡ. Был һөнәрҙе үҙләштерергә теләгән абитуриенттар математика (профилле фән), физика һәм рус теле буйынса БДИ һөҙөмтәләрен тапшырырға тейеш.

✓Өфө ҡала округы Советы рәйесе итеп Евгений Александрович Семивеличенко һайланды. Семивеличенко кандидатураһын был вазифаға "Берҙәм Рәсәй" партияһы фракцияһы тәҡдим итте. Ҡала Советы рәйесе урынбаҫарҙары итеп Советтың элекке рәйесе Ирек Ниғмәтуллин һәм Александр Баутский күрһәтелде. Евгений Семивеличенко әлеге ваҡытта "Өфө моторҙар эшләү производство берекмәһе" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры урынбаҫары вазифаһын биләй.

✓Ошо көндәрҙә БР Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы тарафынан "Эшсе ҡатын-ҡыҙ-2012" тип аталған һөнәри оҫталыҡ бәйгеһе уҙғарылды. Быйыл үҙ ҡалаһында йә районында иң лайыҡлы тип табылған ун һылыу бәйге тотто. "Эшсе ҡатын-ҡыҙ - 2012" титулына Аҫҡын ауылы 1-се һанлы дөйөм белем биреү мәктәбенең инглиз теле уҡытыусыһы Лариса Динисламова лайыҡ булды. "Иң һөйкөмлө" номинацияһында Бөрйән районы Иҫке Собханғол ауылының "Масим" йәштәр-үҫмерҙәр клубы социаль педагогы Регина Юлбирҙина еңеп сыҡты.

**✓ *Ә беҙ, Аллаһ ҡолдары, әлеге тапшырыуҙа бәйән ителгәндәй боҙоҡлоҡтар ҡылып, Ҡиәмәтте яҡынайтабыҙ ғына. Әлеге лә баяғы битарафлығыбыҙ, иманһыҙлығыбыҙ, бөгөнөбөҙгә, киләсәгебеҙгә төкөрөп ҡарауыбыҙ менән.***



*ӘСТӘҒӘФИРУЛЛАҺ!*

# МӘҘӘНИӘТ, ИМЕШ...



**Рәсәй телевидениеһының Беренсе каналында барған "Һөйләһендәр әйҙә" тапшырыуын бик ҡарап бармайым, әммә был юлы уға осраҡлы ғына юлыҡтым да, унда һөйләнгәндәрҙе тыңлап, аптырап ҡалдым. Мәскәүҙәге бер сиркәүҙә ике йәш ҡатын әхлаҡҡа һыймаған "тамаша" ойоштора: битлектәр кейеп алып, аҡырып йырлай, гитарала уйнай, төрлөсә алйотлана. Полиция хеҙмәткәрҙәре уларҙы ҡулға ала һәм йәмәғәт урынында тәртип боҙған өсөн бикләп ҡуя. Әле тәртип боҙоусыларға суд булмаған, тикшереү эштәре бара.**

Тапшырыу аудиторияһына йыйылған халыҡ зыҡ ҡубып ошо ваҡиғаны тикшерҙе. Күпселек ул әхлаҡһыҙ ҡатындарҙы яҡланы, йәнәһе, улар берәүгә лә зыян килтермәгән, тик үҙҙәренең "сәнғәтен" генә күрһәткән, донъяға ҡарашын белдергән. Йәнәһе, христиандар кешене ғәфү итә белергә, язаның иң йомшағын ҡулланырға, балалы ҡатындың олатай ҡулында ҡалған ҡыҙын уйларға тейеш. Әйткәндәй, балалы ҡатындың атаһы, оялмай, ошо тапшырыуға килеп, ҡыҙын яҡлап ултырҙы. Ғәйепләнеүселәргә ирек даулап ҡултамғалар йыйып йөрөүсе студент егет тә теше-тырнағы менән әлеге "бахырҡайҙарҙы" яҡланы. Христиан, йәһүд, мосолман дин әһелдәре ҡатындарҙың был ҡылығын вәхшилеккә тиңләне, тик уларҙың да сығышы ҡырҡа һәм ҡаты булманы, миңенсә. Бер журналист һәм ҡануниәт белгесенән башҡалар был тапшырыуға сиркәүҙә диндар кешеләрҙең битенән көлгән әҙәм аҡтыҡтарын аҡлар өсөн йыйылғайны һымаҡ. Иң аптыратҡаны шул: ҡатындар үҙҙәре ошо ҡылыҡтары өсөн үкенес тә белдермәгән, ғәфү ҙә үтенмәгән һәм әлегә быны кәрәк тип тә тапмай. Закон әһелдәре әйтеүенсә, уларға 7 йылға тиклем иректән мәхрүм итеү янай. Ә тапшырыуҙа ҡатнашыусылар язаны йомшартыусы башҡа ысулдар тәҡдим итте: берәүҙәр, йыл дауамында ҡатындар сиркәү биләмәһен, урамдарҙы һепереһен, тине, икенселәр, сиркәүгә алып барып, ул ҡатындарҙың ендәрен ҡыуҙыртырға кәрәк, тип, әсәнсәләр, Ҡыҙыл майҙанда ғәм халыҡ алдында ҡайыҙларға кәрәк, тип аптыратты. Күпселек барыбер был әхлаҡһыҙҙарҙы ғәфү итеү, ирекккә сығарыу яғында булды. Рәсәйҙә беҙ сәнғәт "юғарылығына" ошолай күтәреләбеҙ һәм бар боҙоҡлоҡтарҙы ла ғәфү итәбеҙ, күҙ йомабыҙ, тигәнгә ишара булды инде был...

Әлбиттә, һәр дин беҙҙе миһырбанлы, кешелекле булырға өйрәтә. Әммә ошондай вәхшилектәргә, ҡәбәхәтлектәргә күҙ йомоп ҡарауыбыҙ беҙҙең үҙебеҙҙе дөйөм һәләкәткә алып килмәсме? Аллаһы Тәғәлә хисапта етеҙ. Боҙоҡлоҡто күрһәң - ҡулың, ҡулың менән туҡтата алмаһаң - телең, улай ҙа булдыра алмаһаң, күңелең менән туҡтат, быныһы - имандың иң зәғиф дәрәжәһе, тип өйрәтә Мөслимдән еткерелгән хәҙис. Йәғни боҙоҡтарҙы ҡул, тел менән дә туҡтатырға ҡурҡабыҙ икән, улар бөтһөн тип доға ҡылырға, Хоҙайҙан һорарға тейешбеҙ.

Әле һәр ҡайҙа, быйыл донъя бөтә, тип лаф оралар. Ә бит Ҡиәмәттең килерен бер Аллаһ ҡына белә. Ә беҙ, Аллаһ ҡолдары, әлеге тапшырыуҙа бәйән ителгәндәй боҙоҡлоҡтар ҡылып, Ҡиәмәтте яҡынайтабыҙ ғына. Әлеге лә баяғы битарафлығыбыҙ, иманһыҙлығыбыҙ, бөгөнөбөҙгә, киләсәгебеҙгә төкөрөп ҡарауыбыҙ менән. Хәҙистәрҙән аңлашылыуынса, һинең, минең генә иманда булыуым донъяны ҡотҡармай, уның бөтөнлөгө өсөн иманлыһы ла, кафыры ла берҙәй яуаплы...

**Айһылыу ЙӘҒӘФӘРОВА.**

---

шәжәрәлә ҡатнашыусы бер башҡорт ғаиләһе, мәсәлән, ата-бабаларының XIII быуатҡа барып тоташҡан 47 быуын шәжәрәһен тәҡдим итте.

Ғөмүмән, райондың профессиональ белем биреү уҡыу йорттары араһынан 115-се лицей, 5-се һөнәрселек училищеһы, яғыулыҡ-энергетика колледжы коллективтары шәжәрә байрамдарында ла, башҡа төрлө конкурс, фестивалдәрҙә лә әүҙем ҡатнаша. 5-се һөнәрселек училищеһы уҡыусылары төҙөүсе һөнәрен үҙләштерһә лә, тарих һулышын тойоп, ижад утында янып белем алалар. Эшсе йәштәр район, республика кимәлендә уҙғарылған сараларҙа ҡатнашыу ғына түгел, үҙ ҡулдары менән "Тарих һулышы" тип аталған ҙур этнография музейы ойошторҙо. Училище оҫталары үҙ ҡулдары менән тирмә эшләп ҡуйҙы.

Берҙәм һәм эҙмә-эҙлекле эшебеҙ һөҙөмтәһе - етенсе йыл рәттән башҡорт теле уҡытыусыларыбыҙ "Баш ҡала йыл уҡытыусыһы" конкурсында еңеү яулай. Ҡоролтай әүҙемселәре тарафынан төрлө ойошмаларҙың, магазиндарҙың бланкыларын, алтаҡталарын дөрөҫ итеп яҙыу буйынса ла ҙур эш башҡарылды. "Хатаһыҙ ҡала" конкурсында районыбыҙ йыл да призлы урындар яулай. Башҡортостан юлдаш телевидениеһында барған "Башҡорт телен өйрәнәбеҙ" тигән тапшырыу Орджоникидзе районы башҡорттары ҡоролтайы тарафынан тәҡдим ителгәйне. Уны әҙерләүҙә һәм төшөрөүҙә Башҡорт йәкшәмбе мәктәбе, 71-се мәктәп, 48-се лицей уҡытыусылары һәм уҡыусылары ла әүҙем ҡатнаша.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, районыбыҙҙа күҙгә салынып торған, күңелде ҡырған етешһеҙлектәр ҙә бар. Мәсәлән, Мәҙәниәт һәм халыҡ ижады үҙәге уңышлы ғына эшләп килә. Төрлө байрам сараларын "Нарспи" сыуаш фольклор ансамле, "Кобзарь" украин хоры, "Ош виче сем" мари фольклор ансамле, "Зори Агидели" рус ансамле сығыштары биҙәй. Әммә был халыҡтар ижадын бергә туплаған гөлләмәлә башҡорт фольклор ансамбле генә юҡ. Әлбиттә, ул ансамблде ойоштороу өсөн Мәҙәниәт һәм халыҡ ижады үҙәгендә эш урыны булдырырға һәм етәксе итеп тәғәйенләрлек квалификациялы белгес табырға кәрәк. Ҡыҙғаныс, бөгөнгәсә беҙ ошо эште ең һыҙғанып эшләй торған белгескә мохтажбыҙ.

**Мәрфуға МОСТАФИНА,**
**Орджоникидзе районы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты рәйесе.**

---

*ҺОРАУ - ЯУАП*

## ҠОРАЛ - УЙЫНСЫҠ ТҮГЕЛ

**Пневматик пистолет һатып алырға уйлайым. Миңә ҡайҙа, кемгә мөрәжәғәт итергә?**

- Йәшәгән урынығыҙ буйынса полиция бүлегендәге рөхсәт-лицензия бүлексәһенә ғариза менән мөрәжәғәт итегеҙ, уға нарколог менән психиатрҙан белешмә беркетегеҙ, имтихан тапшырығыҙ. Ғариза ғәҙәттә ай дауамында ҡарала, унан ул йә раҫлана, йә кире ҡағыла. Ҡоралға хоҡуҡ тураһында таныҡлыҡ алғандан һуң магазинға барып, ниәтләгән төр ҡоралды һатып алырға мөмкин. Тик шуны ла иҫтә тотоғоҙ: ҡорал - уйынсыҡ түгел, уны нисек һәм ҡайҙа етте - шулай, айырыуса күп кеше йыйылған урындарҙа файҙаланыу тыйыла. Кәрәк булмаған осраҡтарҙа ла ҡорал ҡулланыу административ, енәйәт яуаплылыҡтарына килтереүе ихтимал.

## ТЕРКӘРГӘМЕ, ЮҠМЫ?

**Ике бүлмәле фатиремды арендаға тапшырып, бер йылға килешеү төҙөнөк. Бындай килешеү рәсми теркәлергә тейеш, тип ишеткәйнем, миңә ни эшләргә?**

- Бында тәүҙә ниндәй килешеү төҙөлөүенә асыҡлыҡ индереп китеү мотлаҡ. Арендалау килешеүе һәм яллау килешеүе тигән төшөнсәләр бар. Әгәр фатирға юридик шәхес килеп урынлаша икән, был осраҡта торлаҡты ҡуртымға алыу (аренда) килешеүе төҙөлә (РФ Граждандыҡ кодексы; п. 2, ст. 671), ә инде унда физик шәхес йәшәй башлаһа, әлеге Кодекстың 683-сө статьяһына ярашлы, 5 йылдан да кәм булмаған осорға торлаҡ яллау килешеүе төҙөлә, был осраҡта Кодекстың 164, 131-се статьяларына һәм күсемһеҙ милеккә һәм уның менән эш итеүгә хоҡуҡ теркәүе тураһындағы федераль законға ярашлы дәүләт теркәүе талап ителмәй.

Торлаҡ бинаһын бер йыл һәм унан да күберәк ваҡытҡа ҡуртымға алыу тураһындағы килешеү дәүләт теркәүе үтергә тейеш, ә йылдан кәмерәк ваҡытҡа төҙөлһә - кәрәк түгел.

## ХӘҮЕФҺЕҘЛЕК МАҠСАТЫНДА

**Сит илгә сығыр алдынан рәсәйлеләрҙән ниндәйҙер анкета тултырталар икән, тип ишеттем. Уның маҡсаты ниҙә?**

- Туризм буйынса Федераль агентлыҡ быйылдан башлап тәүҙә Ростуризм сайтында, аҙаҡ дәүләт хеҙмәт күрһәтеү порталында ошондай яңылыҡ тәҡдим итә: туристар анкетала үҙҙәре барасаҡ урындарҙы һәм кеҫә телефондары номерын күрһәтә. Был тәжрибә башҡа ҡайһы бер илдәрҙә күптән эшләп килә. Уның маҡсаты шунда: был көтөлмәгән хәл-ваҡиғалар килеп тыуған осраҡтарҙа урындағы властарға сит илгә сыҡҡан ватандаштарына оператив ярҙамды мөмкин тиклем тиҙләтергә мөмкинлек бирәсәк. Мәсәлән, Каирҙағы боларыштар ваҡытында турфирмалар ярҙамынан тыш сәфәр ҡылыусы рәсәй туристарына, улар хаҡында етерлек мәғлүмәттәр булмауы сәбәпле, ваҡытында тейешле ярҙам күрһәтеү мөмкин булманы. Бындай анкетаны тултырыу айырыуса ил эсендә мажаралы, экстрим-сәйәхәткә (тайғаға, мәсәлән) сығырға йыйыныусылар өсөн мотлаҡ иҫәпләнә. Поход маршруты һәм телефон номеры билдәле булған хәлдә МЧС ярҙамы тиҙерәк һәм һөҙөмтәлерәк буласаҡ. Әлегә бындай онлайн-теркәлеү тәҡдим рәүешендә кәңәш ителә.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА**
**әҙерләнә.**

---

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



### Аҙ ҡанлылыҡтан

❖ Ҡыҙыл сөгөлдөр менән кишер һуты;

❖ 1 балғалаҡ балды ярты стакан ҡыҙыл сөгөлдөр һуты менән болғатып, ашар алдынан ярты сәғәт элек көнөнә 3 тапҡыр ҡулланырға; оҙайлы ваҡыт ҡыҙыл сөгөлдөр, кишер, ҡара торма һутын (1:1:1) 2 ҡалаҡ эсергә;

❖ көн һайын иртәнсәк ас ҡарынға ҡырғыстан үткәрелгән 100 грамм кишерҙе ҡаймаҡ йәки үсемлек майына болғап ашарға;

❖ көнөнә өс тапҡыр ашар алдынан 20 минут алда 1-әр ҡалаҡ юл япрағы үләне һутын ҡабул итергә;

❖ тигеҙ күләмдә кесерткән һәм ҡайын япрағы алып болғатырға һәм 2 ҡалаҡ ошо ҡатнашманы 300 мл ҡайнар һыу менән 3 сәғәт төнәтеп, һөҙөргә. Тәүлек буйына 3-4 өлөшкә бүлеп эсергә. Дауаланыу курсы - 3-4 аҙна;

❖ 400 грамм сифатлы шоколадты ҡырырға, иләк аша үткәрергә һәм уға шәкәр менән туҡылған йоморҡта һарыһы һәм алма ҡушылған иретелгән май өҫтәргә. Болғатырға, һыуытырға. Килеп сыҡҡан ҡушылманы икмәккә һылап, көнөнә 3-4 мәртәбә ҡайнар һөткә ҡушып ашарға.

### Теш ҡаҙнаһы өсөн

Шәкәр сөгөлдөрөн ҡырғыс аша үткәреп, теш ҡаҙнаһына һалырға. Был рецепт теш һыҙлауынан да ярҙам итә.

### Дисбактериоз

0,5 л йылытылған һыуға 1 ҡалаҡ бал һәм шәкәр, 2 грамм сүпрә өҫтәп, сәғәт ярым йылы урында тоторға. Ашарҙан 3-4 сәғәт алдан ошо дауаны тотошлай эсергә. Әгәр ҙә беренсе тапҡырҙан ярҙам итмәһә, 2-3 көндән тағы ҡабатларға.

### Баш тиреһе экземаһы һәм сәс ҡойолоуҙан

❖ 20 грамм цикорий тамыры йәки 40 грамм цикорий үләненә 1 литр һыу ҡойоп, утҡа ҡуйырға һәм 30 минут дауамында ҡайнатып, һөҙөргә. Экзема ваҡытында һөртөргә; ❖ баштың ҡоро экземаһы һәм сәс ҡойолоуҙан ҡотолоу өсөн сәсте аҙнаһына бер тапҡыр йылы һыу менән йыуып, 15 минут буйына эре тоҙ менән сәс төбөн ышҡырға. Сәсте аҙаҡтан шул уҡ һыу менән йыуырға. Сир үтһен өсөн алты процедура етә.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ *Милләт проблемаларына, көндәлек тормошҡа, мәктәп, ғаилә тәрбиәһенә, сәйәсәт, мәҙәниәт өлкәһендәге күп кенә проблемаларға үҙ ҡараштарын еткерә алды конкурсанттар. Алмашҡа битараф булмаған балалар үҫеп килә икән.*



АФАРИН!

# БАШҠОРТ ЮМОРЫНЫҢ...

## матур өлгөһөнә әйләнә "Шаяниум"


"Ҡыҙыҡ мажор" командаһы.


"XX Централ" командаһы.


"VIP йәштәре" командаһы.


"Башҡорттар.RU" командаһы.


"Кендектәр" командаһы.


"Рәссамдар" командаһы.

**(Башы 1-се биттә).**

### Таныштырыу

Командаларҙың тәүге сығышы: "Тау башында балҡый бер ҡала" темаһына арналғайны. Әйтергә кәрәк, таныштырыу ваҡытында уҡ командалар араһында кемдең ярышҡа яуаплы ҡарауы, кемдең илке-һалҡыраҡ әҙерләнеүе күҙгә салынды. Берәүҙәр тамашасыны көлдөрөү - ул ысын ижад, тип ҡараған, икенселәр, сәхнә түренә сығып, тегеләй-былай атлап йөрөп, үҙенде күрһәтеү ҙә етә, тип иҫәпләгән. Ә шулай ҙа "Шаяниум" ярыштарында тел шымалығы, көләмәстәрҙең эстәлеге, темаларының төрлөлөгө буйынса алдағы йылдарҙа әйтелгән күрһәтмәләр иҫәпкә алынған булыуы ҡыуандырҙы. Тимәк, балалар үҙ сығыштарын камиллаштырыу, башҡортса һөйләшә, фекер йөрөтә белеү өсөн тырышлығын йәлләмәй. "Ҡыҙыҡ мажор", "Һупайлы дәрүиштәре", "XX Централ" командалары яңы көләмәстәр уйлап сығарып, бөгөн булып ятҡан сәйәси ваҡиғаларҙан да көлкө тапҡан. Талантлы балаларҙы туплаған "Башҡорттар.RU" командаһы уҡыусылары иһә был юлы оҙаҡ баш ватып тормаған, яңы состав йыйып, алдағы йылдарҙа сәхнәгә сығарған көләмәстәрен генә ҡабатланы ла ҡуйҙы. Ә бит "Шаяниум"дың төп шарттарының береһе - үткән йылдарҙа булған мәрәкәләрҙе кире ҡабатламау. 2005-2007 йылдарҙа уҙғарылған "Шаяниум" уйындарында яңғыраған көлкө һүҙҙәр бөгөнгө көндә актуаль булыу түгел, ниндәйҙер ҡыҙыҡһыныу ҙа уята алманы. Шуға ла бынамын тигән башҡорт егеттәре тамашасыны дәртләндереп, ни тиклем генә шәп сығыш яһамаһын, яҡшы баһа яулай алманы.

### Музыкаль төрттөрөүҙәр

Бәйгенең "Һәр кем үҙенсә" тип исемләнгән был традицион өлөшөндә ҡатнашыусылар эстрада йырсылары, сәхнә артистары, телевидение-радио өлкәһендәге музыка менән бәйле һәр кешегә, характерға ҡарата пародия, миниатюралар күрһәтеү, көләмәстәр һөйләү буйынса ярышырға тейеш ине. Эстрада йырсылары Радик Юлъяҡшин, Илгиз Абдрахманов, Лиана Хәбибуллина, Анжелика исемдәре быйыл да ситтә тороп ҡалманы. Таяҡтың бер башы уларға эләкһә, икенсе осо "Башҡортостан" телерадиокомпанияһының "Тамыр" студияһы режиссеры Ләйсән Мәзитоваға тейҙе. Әйткәндәй, музыкаль төрттөрөүҙәр барышында З.Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияның "Ығы-зығылар" командаһы Ғилмиязаға кейәү эҙләтеп, ысын мәғәнәһендә ығы-зығы яһаны. Атай кеше башҡорт халыҡ оҙон көйҙәрен яҡшы башҡарыусы Ғилмияза ҡыҙына кейәү эҙләтә. Бәйгенең шарты: ҡыҙҙың йөрәген моңло итеп йыр башҡарған батыр ғына яулап аласаҡ. Әммә былдай егеттәр юҡ. Радик Юлъяҡшин, МСБаш, Илгиз Абдрахмановтар роленә ингән егеттәр ҡыҙҙың күңелен әсир итергә тырышты. Ғилмияза бер йырсыға ла ыңғай яуап бирмәне. Ахыр сиктә, атай кеше барыһын да мәжлес табынына оҙатты. Ат башы тотоп, башҡорт ҡыҙы алдында сабып йөрөгән д`Артаньян ғына Ғилмиязаның иғтибарын яулай яҙып ҡуйҙы шулай ҙа. Тик ул сибәр ҡыҙ алдында хатта туҡтап та китмәгәс, уның был йырсылар араһында ни эшләп йөрөүе аңлашылманы. Бәлки, был сығыштарында "Ығы-зығы"лар башҡорт ҡыҙҙарының сит милләт егеттәре менән ғаилә ҡороу сәбәптәренең береһенә ишараларға, моңһоҙланып йөрөүсе башҡорт егеттәренең Ғилмияза кеүек аҫыл ҡыҙҙарҙан ҡолаҡ ҡағыуын сағылдырырға тырышҡандыр? Әммә, башҡорт эстрада йырсылары араһында инде күптән тапалған Радик Юлъяҡшин, Илгиз Абдрахмановтарҙан көлөүҙең ҡыҙығы бөтөүгә ошонда һиҙелде.

### Өйгә эш

"Шаяниум"дың өсөнсө өлөшөндә командалар "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" темаһына шаярҙы. Уларҙың сығыштарында бала саҡтың сағыу мәлдәре, мәктәп, ғаилә хәлдәре сағылыш тапты. Уҡыусылар тормошта үҙҙәре белгән-күргән һәр мәғлүмәткә баһа бирҙе, уны нисек аңлауын белдерҙе. Өйгә эш этабында М.Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһының "Кендектәр" командаһы сығышы айырыуса хәтергә ныҡ уйылып ҡалды. Башҡорттар ғаиләһенә "марсҡорт" - Марста йәшәүсе башҡорт ғаиләһе ҡунаҡҡа килеп төшә. "Марсҡорт" ҡатыны ғаиләһе менән таныштыра: "Был минең балаларым - Владик һәм Маша",- ти. "Ни өсөн һин үҙең башҡорт, ә балаларыңдың исеме урыҫ?"- тип, аптырап ҡала Ер ғаиләһе. "Сөнки минең ирем "марсаш"- Марста йәшәгән сыуаш!"- тип аңлатма бирә "марсҡорт". Балаларыбыҙҙың милләтебеҙҙең иң киҫкен, актуаль проблемаларына ҡарата битараф түгеллеге ошонда күренде. Милләт проблемаларына, көндәлек тормошҡа, мәктәп, ғаилә тәрбиәһенә, сәйәсәт, мәҙәниәт өлкәһендәге күп кенә проблемаларға үҙ ҡараштарын еткерә алды конкурсанттар. Алмашҡа битараф булмаған балалар үҫеп килә икән, тимәк, "Шаяниум"дың да, башҡорт милләтенең дә киләсәге бар.

### Финал

"Шаяниум"дың һөҙөмтәләре рус һәм башҡорт мәктәптәренән килгән командалар араһында айырым билдәләнде. Әйтергә кәрәк, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ өйрәнеүсе балалар ҙа башҡортса һөйләшеү, башҡортса шаярыу буйынса башҡаларҙан һис ҡалышманы. Шулай итеп, башҡорт мәктәптәре араһында: III дәрәжә дипломы менән Ҡ.Дәүләткилдиев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернаты "Рәссамдар", 122-се Башҡорт гимназияһы "ША-ШУ-ША", Республика башҡорт лицей-интернаты "Башҡорттар.RU" командалары бүләкләнде. II дәрәжә дипломы: Ф.Мостафина исемендәге 20-се Өфө ҡала башҡорт гимназияһы "XX Централ" һәм М.Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһы "Кендектәр" командаһына бирелде. Һәм, ниһайәт, иң юғары I дәрәжәләге дипломға Ғ.Әлмөхәмәтов исемендәге Республика музыка гимназия-интернаты "Ҡыҙыҡ мажор" һәм М.Исҡужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы "Һупайлы дәрүиштәре" шаяндары һәм отҡорҙары лайыҡ булды. Бынан тыш, биш команда төрлө номинацияларҙа билдәләнде. "Шаяниум батыры" исеменә Республика башҡорт лицей-интернаты "Башҡорттар.RU" командаһынан Хәлил Усманов лайыҡ булды. Ә "Шаяниум һылыуы" - 102-се Башҡорт гимназияһы "Етегән+1" командаһында сығыш яһаусы Элина Юлышеваға бирелде.

Рус мәктәптәре араһында III дәрәжә дипломы менән 4-се урта дөйөм белем биреү мәктәбенең "Затонград" отҡорҙары бүләкләнде. II дәрәжә дипломы 159-сы урта дөйөм белем биреү мәктәбенең "Хыялый-зыялыйҙар" командаһына тапшырылды. 21-се лицейҙың "Берҙәм егерме берҙәр" командаһы "Шаяниум"дың I дәрәжә дипломына лайыҡ, тип табылды.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

**(Теманың дауамы 16-сы биттә).**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**Башҡорт халҡы борон-борондан үҙенең дәүләтселеген төҙөү хыялы менән янған һәм тарих һуҙымында ошо маҡсатына ынтылып йәшәгән. Бәлки, тап ошо маҡсат Октябрь инҡилабынан һуң Рәсәйҙә иң беренсе булып автономиялы республика төҙөүгә алып килгәндер. Тарих китаптары һәм ҡайһы бер тарихсылар "Октябрь революцияһы ғына башҡорттарға үҙ дәүләтселеген төҙөү мөмкинлеге бирҙе" тип раҫларға тырышһа ла, Башҡортостан совет автономияһы - башҡорт халҡының автономия өсөн ҡоралды һәм сәйәси көрәше һөҙөмтәһе ул. Эйе, күпмелер ваҡыттан һуң Килешеүҙе РСФСР халыҡ комиссарҙары рәйесе В. Ленин "ҡағыҙ киҫәге" тип атай. Бәлки, тап ошо "ҡағыҙ киҫәге" башҡорттарға артабан көрәшергә, үҙ-үҙенә ышанырға, ауырлыҡтарға баш эймәй алға барырға әйҙәп торғандыр.Үҙгәртеп ҡороуҙар башланғас, ил тарихында төрлөсә үҙгәртеүҙәр, борғолауҙар башланды. Әммә уның шул яғы әһәмиәтле: милли тарихсылар бығаса тимер ҡоршау артында булған факттарҙы халыҡҡа сығарыуға әүҙем тотондо. Бығаса күңел төпкөлөндә генә йәшеренеп ятҡан фекерҙәр, ярға һыймаған даръялай, тышҡа бәреп сыҡты. Тарихи хәҡиҡәт тантана итте. Тик был хаҡта күптәребеҙ әле лә хәбәрҙар түгел. Ошо бушлыҡты тултырыу һәм автономия "уйыны" актерҙарының мәкерле планын халҡыбыҙға күрһәтеү маҡсатынан Салауат Хәмиҙуллин менән Рөстәм Таймаҫовтың "Оло Башҡортостан"дың ойошторолоуы..." китабынан өҙөк тәҡдим итәбеҙ.**

# АВТОНОМИЯ УЙЫНЫ...



1919 йылдың 20 мартында "Үҙәк совет власының Башҡортостан хөкүмәте менән Башҡортостан совет автономияһы тураһында килешеү"гә ҡул ҡуйыла. Үҙәктән РСФСР халыҡ комиссарҙары рәйесе В. Ленин, ВЦИК рәйесе М. Владимирский, милләттәр наркомы И. Сталин ҡул ҡуя. Башҡортостан делегацияһы яғынан Башҡортостан хөкүмәте рәйесе М. Ҡулаев, Башҡортостан өлкә советы ағзаһы М. Халиҡов, башҡорт ғәскәрҙәре командующийы адъютанты А. Бикбаув ҡултамғаларын һала. Килешеү Башҡортостандың йәмғиәт, дәүләт һәм административ ҡоролошо тураһындағы 16 пункттан тора һәм, ғәмәлдә, уның беренсе Конституцияһы була. Беренсе пунктта: "Башҡортостан Автономиялы Совет Республикаһы Кесе Башҡортостан сиктәрендә ойошторола һәм РСФСР составына ингән федератив өлөш булып тора", - тип яҙыла. Шулай итеп, РСФСР составында беренсе республика барлыҡҡа килә. Уның иҡтисади үҙаллылығын 5-се пункт тәьмин итә: "Башҡортостан территорияһында тимер юлдары, заводтар һәм рудниктар үҙәк Совет власының ҡарамағында ҡала, урындағы сәнәғәт продукттарын бүлгәндә Башҡортостан Совет Республикаһының ихтыяждары тәү сиратта ҡәнәғәтләндерелә".

Автономия киләсәктә СССР составында буласаҡ союздаш республикаларға ла тәтемәгән киң хоҡуҡтарға эйә була. Килешеүгә үҙ аллы башҡорт армияһы тураһында ла - башҡорт эшмәкәрҙәре өсөн автономия кеүек үк көнүҙәк булған пункт индерелә. Быға тиклемге ике йыл был позицияның хаҡлығын дәлилләй. Шулай итеп, 9-сы пункт: "Башҡортостан Совет Республикаһында Совет власын һәм Рәсәй, донъя контрреволюцияһы менән көрәште нығытыу маҡсатында дүрт полклы бер кавалерия дивизияһы һәм өс полклы бер уҡсылар бригадаһы составында, дөйөм командованиеға буйһонған һәм Ҡыҙыл Армия тураһындағы положениеға ярашлы идара ителгән айырым башҡорт армияһы ойошторола". Был ваҡиғаға тиклем бер көн элек, 19 мартта, Ә.-З.Вәлидов яҙыуынса, Ленин РКП(б)-ның VIII съезында Рәсәйҙең аҙ халыҡтарының үҙбилдәләнешенә ҡаршы булған Бухарин менән бәхәскә инә: "Ул (Ленин) Бухаринға тактик күҙаллауҙар арҡаһында буржуаз милләтселәр менән килешеүгә барырға тура килә...", - ти. Тактик маҡсатҡа ярашлылыҡтың миҫалы итеп Ленин үҙенең Финляндия премьер-министры Свинхувуд менән осрашыуын килтерә: "...минә Смольныйҙа Свинхувудҡа - палач ролен уйнаусы фин буржуазияһы вәкиленә грамота бирергә тура килгәндә... был яҡшы түгел ине! Әммә быны эшләргә тура килде, сөнки был буржуазия ул ваҡытта халыҡты, хеҙмәтсәндәрҙе, москалдәр, шовинистар, великоростар финдарҙы быуып алырға теләй, тип алданы... Ә кисәге шуны уҡ Башҡорт республикаһына ҡарата ҡулланырға тура килмәнеме ни?" Бынан Вәлидов шуны аңлай: "Ленин һәм уның арҡаҙаштары беҙҙең менән Килешеүҙе ваҡытлы күренеш тип иҫәпләй...Киләсәктә беҙҙе, үзбәк муллалары һәм фин капиталистары кеүек итеп, ситкә ташлаясаҡтар, ә власты ваҡыт үтеү менән коммунистар партияһы тәрбиәләп үҫтергән ағзалар ҡулына тапшырасаҡтар. Әммә беҙ уларҙың ниәтен аңлауыбыҙҙы дуҫтарыбыҙға ла, дошмандарыбыҙға ла әйтмәнек".

Рәсәйҙең 1920 йылдан һуң ойошторолған башҡа автономиялы республикаларынан айырмалы, "Башҡордистан" башҡорт халҡының автономия өсөн ҡораллы һәм сәйәси көрәше һөҙөмтәһе була. Был факт бәхәсһеҙ. В. Лениндың Башҡортостандағы уполномоченныйы Т. Сидельников былай тип яҙа: "Башҡортостан республикаһының хәрби сығышы шик аҫтына алынмай... Республикала хәрби эш барыһынан да өҫтөнөрәк ҡуйылған: күрше губерналар менән сағыштырғанда, яҡшыраҡ һәм ҡырғыҙҙарҙағыға ҡарағанда юғарыраҡ. Бында башҡорттарҙың батшаларға ҡаршы ҡорал күтәреү кеүек "бунтарь традициялары" һәм хәрби йөкләмә үткәндә алған хәрби оҫталығы бер йүнәлештә эшләй... Башҡорттар, әлбиттә, үҙҙәренең "союздаштары": кисәге "колчаксылар", бөгөн Ҡыҙыл Армияның әҙер рецептарын ҡулланып та һуғыша һәм хәрби мөнәсәбәттә ойоша ала". Әммә хәҙер автономияны һаҡлап ҡалырға ла кәрәк була. Эш шунда, әгәр большевистик "юғарылыҡта" федерация идеяһы ҡабул ителһә, төбәк большевистик ойошмаларҙа "һул"дар кәйефе өҫтөнлөк итә һәм улар пролетар шовинизмға әүерелә.

В. Куйбышев, мәҫәлән, Беренсе Ҡыҙыл Армия командирҙары һәм комиссарҙары, Үҙәк менән Башҡортостан хөкүмәте араһында килешеү төҙөлөүен белә тороп, "милли формированиелар төҙөү һәм башҡорт корпусын ҡорал менән ҡалдырыуҙың мөмкин түгеллеген, сөнки Рәсәй бер ниндәй автономияларһыҙ берҙәм булырға тейешлеген" раҫлауын дауам итә, тип яҙа. Ырымбур ревкомының 1919 йылдың 2 мартындағы ултырышында: "Үҙәк автономия иллюзияһын булдырып, һуңынан һәр халыҡ автономиянан баш тартһын өсөн булһа ла халыҡтарҙың киң автономияға эйә булыуы яҡлы. Икенсе яҡтан, кире осраҡта башҡорттар аҡ гвардия яғына сығыуы мөмкин. Шуға күрә Башҡортостандың автономияһын танырға кәрәк", - тип белдерә. Әммә 9 мартта тауыш биргәндә шундай ҡарар ҡабул ителә: "Үҙәккә телеграмма ебәрергә, унда партияның урындағы ойошмаһы комитеты мосолман вәкилдәре менән берлектә Башҡортостандың автономияһына ҡаршы сыҡты..." Сталинға бигерәк тә Колчактың яҙғы һөжүме башланыуы шарттарында партия буйынса кесе коллегаларының башбаштаҡлығы оҡшамай һәм ул уларҙы иҫкәртә: "...Коростелев (Ырымбур губерна комитеты рәйесе) һәм Шәмиғолов (милләттәр эше буйынса губерна комиссары) килешеүҙең тормошҡа ашыуына ҡаршы сыға һәм партия Үҙәк комитетының сәйәсәтенә ҡаршы килеп, үҙҙәренең шәхси сәйәсәтен үткәрә... Үҙәк комитеттың сәйәси линияһынан аҙ ғына тайпылыу ҙа ғәйепләләрҙе партиянан сығарыу менән тамамланыуы ихтимал". Шуға ҡарамаҫтан, был сәйәсәт дауам итә, етмәһә, большевистик лидерҙарҙың береһе тарафынан рәсми булмаған санкция ала. Ырымбур губерна башҡарма комитетының, губерна комитетының һәм 1-се армия командованиеһының 1919 йылдың 20 мартында уҙған ябыҡ ултырышында ВЦИК рәйесе М. И. Калинин башҡорт автономияһына мөнәсәбәтен тамамланған формулала бирә: "Ырымбурҙағы иптәштәргә ҡарата үҙәктең ышанысы булыуы йәки булмауы тураһында һүҙ булырға ла мөмкин түгел. Башҡордистандың автономияһы - көнсығыш халыҡтары өсөн буф. Беҙ башҡорттарға ышанмайбыҙ, уларҙың һалдаттарын Питер эргәһенә ҡыуалайбыҙ. РКП Ырымбур губерна комитетының башҡорт партия үҙәге төҙөргә тыршыуы бик мөһим һәм уның аныҡ һөҙөмтәләр биреүе зарур. Беҙгә уларҙың автономияһын уйнарға, бөтөн ергә үтеп инергә һәм тамырҙарын коммунизм менән фалиждан һуҡтырырға кәрәк..." Коростылев шулай тип тә өҫтәй: "Башҡордистандың аҡсалата субсидияларын мөмкин булған тиклем тотош түгел, ә тейешле бүлектәребеҙ аша ебәрергә кәрәк". Бер һүҙ менән әйткәндә, Башҡортостан Республикаһын ҡорал менән баҫтырыу идеяһынан большевиктар саботаж сәйәсәтенә күсә.

**Земфира ХӘБИРОВА
әҙерләне.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



# БАШҠОРТ ТАРИХЫ ҺӘМ ЭТНОГРАФИЯҺЫ

**Крайҙы өйрәнеүсе тәүге башҡорт ғалимдары араһында киң белеме менән тарихсы һәм этнограф, телсе һәм географ, шағир һәм яҙыусы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев айырылып торған. Уның фәнни ҡарашы формалашыуға алдынғы рус һәм татар, сит ил фән, мәҙәниәт эшмәкәрҙәре менән аралашыуы ла йоғонто яһаған. Ул шул ваҡытта Өфөлә йәшәгән Р.Г. Игнатьев, М.В. Лоссиевский, Н. А. Гурвич менән аралашҡан, Ш. Мәрҗәни, К. Насыри хеҙмәттәрен яҡшы белгән, 1901 йылда Башҡортостанға килгән венгр ғалимы, башҡорт халыҡ йырҙарын йыйыусы В. Преле менән әңгәмәләшеп торған.**

1897 йылда М. Өмөтбаевтың иң мөһим ғилми эштәренең береһе - "Йәдкәр" китабы донъя күрә, унда башҡорттарҙың тарихы һәм этнографияһы, фольклоры, шәжәрәләре, уғыр-мадьяр-башҡорт бәйләнештәре буйынса авторҙың ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәре урын ала.

Татар ғалимы Г. Н. Әхмәровтың хеҙмәтендә башҡорттар тураһында ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр тупланған. Ул үҙенең тикшеренеүҙәрендә башҡорттарҙың Булғар һәм Ҡаҙан ханлыҡтары менән мөнәсәбәтен һүрәтләй, булғарҙарҙан һуң башҡорттарҙың мосолманлыҡ ҡабул итеүе һәм ике халыҡтың рухи ҡәрҙәшлеге тураһында бәйән итә. "Үҙенең ҡулъяҙмаларында Хисаметдин әл Мөслим Булғарҙа уҡып ҡайтып үҙ илдәрендә мосолманлыҡты таратыусыларҙың исемдәрен һәм хатта уларҙың ерләнгән урындарын һанап үтә", - тип яҙа автор.

Башҡорт ырыуҙарының Рус дәүләте составына инеүе, Г.Н. Әхмәров фекеренсә, мәжбүри акт була. Күп һанлы башҡорт ихтилалдарының колонизацияға ҡаршы характерын билдәләп, ул уларҙың башҡорт халҡының этник һәм рухи үҙенсәлеген һаҡлап ҡалыуҙағы әһәмиәте тураһында һөйләй.

Г. Н. Әхмәров шулай уҡ Өфө һәм Вятка губерналары ауылдары буйлап йөрөп йыйған материалдары нигеҙендә беренсе тапҡыр типтәрҙәрҙең этнографияһы буйынса махсус тикшеренеү үткәрә. "Типтәр"ҙәрҙең айырым халыҡ түгел, ә припущенниктарҙы ла индереп, "айырым түбән ҡатлам" булыуын белдерә.

1907-1908 йылдарҙа Ырымбурҙа Мәккәлә йәшәүсе, сығышы менән Башҡортостандан булған шәйех Морат Рәмзиҙең ике томлы "Тәлфик-әләхбәр в тәлких әл асар фи вәкайғи Ҡазан вә Булғар вә мәләкит татар" китабы ғәрәп телендә донъя күрә. Китаптың айырым бүлектәре нуғай-башҡорт мөнәсәбәттәренә, хужалығына, мәҙәниәтенә, Булғар дәүләте һәм Ҡаҙан ханлығы башлыҡтары тарихына бағышлана. Автор боронғо һәм урта быуат башҡорт ҡәбиләләренең тарихы буйынса ҡиммәтле мәғлүмәттәр килтерә. Аныҡлап әйткәндә, М. Рәмзи боронғо ғәрәп авторҙарына нигеҙләнеп, башҡорттарҙың бөрйән ҡәбиләһенең беҙҙең эраның V быуатына тиклем хәҙерге Мангышлак районы территорияһында йәшәүе тураһында яҙа.

"Мәғлүмәт мәхкәмәи шарғия" журналында тарихсы Х.-Мәхәммәтов-Ғәбәшиҙең "Мофассал тарих ҡәүем төрки" хеҙмәте донъя күрә. 1909 йылда ул Өфөлә айырым китап булып баҫыла. Унда автор "башҡорт" этнонимын аңлатыуға ҙур иғтибар бирә, уны "баш-уйғыр" һүҙенән килеп сыҡҡан тип һанай - "башгыр- башҡорт". Боронғо башҡорттарҙы ул сарматтар, һундар, булғарҙар менән бәйләй. Шулай уҡ боронғо башҡорт ҡәбиләһенең көньяҡ һәм көнсығыш тармаҡтарға бүленеүен дә белдерә. Көньяҡ Уралда башҡорт этносының нигеҙен тәшкил итеп, уғыр-баш йәки уғыр-башҡорт ҡәбиләһе урынлашһа, икенсеһе, бөрйән исеме аҫтында артабан көньяҡҡа китеп, Хорезмғаса барып етә. Бөрйәндәрҙең ҡалған өлөшө башҡорт халҡы составында элекке урындарында йәшәй, тип яҙа автор.

**К. КӘРИМОВ.
(Дауамы бар).**

*✓ Милләт рухының әһәмиәтен аңламаған йәш быуын килде хәҙер власҡа. Беҙ уларға милләт рухының әһәмиәтен аңлата алмаһаҡ, бер көн килеп улар беҙҙең институтты ла ябып ҡуйыуы бар.*



# Хан әҙләткән халҡыбыҙ

**Бер яуыз хан йәшәгән. Ул бер көндө үҙенең ханлығындағы барлыҡ ҡарттарҙы үлтерергә бойорған. Хандың фарманы тайпылышһыҙ үтәлгән. Тик хан ғәскәренең йөҙ башлығы булып хеҙмәт итеүсе бер яугир ғына үҙенең атаһын яу һандығына йәшереп алып ҡалған. Атаһы ятҡан һандыҡты ул үҙе менән йөрөтөп, тик төн уртаһында ғына атаһын унан сығарып ашатыр булған. Берҙән-бер көндө хан үҙе ял иткән күл төбөндә алмас ялтырап ятҡанын күреп ҡала. Уны алыр өсөн яугирҙарын бер-бер артлы күлгә сумдырып эҙләтә, бушҡул көйө сыҡҡан береһенең башын киҫтереп тора. Шулай итеп, хан ғәскәренең бер йөҙлөгөндәге һалдаттарҙың башы киҫелгәс, сират атаһын һаҡлап ҡалған йөҙбашына етә. Төндә ул атаһын һандыҡтан сығарып, хәлде аңлатып биреп, бәхилләшергә була.**

**-Ә күл янында ағас үҫәме? - тип һорай унан атаһы.**

**-Үҫә, хан нәҡ шул ағастың күләгәһендә ултыра, - ти уға улы.**

**-Улайһа, хан күл төбөнән эҙләткән аҫылташ шул ағастың башындағы ҡош ояһында ята булыр...**

**Артабан йөҙбашы, атаһы өйрәткәнсә, күлдең төбөнәрәк төшөр өсөн ағас башына менеп һикерергә хандан рөхсәт һорай. Шунан ағас башына менеп, алмасты ала ла, һыуға сума һәм кире сыҡҡанында аҫылташты ханға тоттора. Хан бик шатлана һәм йөҙбашынан аҫылташты нисек табыуы хаҡында һөйләүен үтенә. Йөҙбашы барыһын да түкмәй-сәсмәй бәйән иткәс, хан ҡарттарҙы үлтертеү хаҡындағы фарманын юҡҡа сығара.**

**Ни өсөн был тарихты иҫкә төшөрҙөк һуң? Хәҙер менеджерҙар заманы килде. Кешелек меңәр йылдар буйына туплаған тәжрибә, фән, ғилем, аҡыл йәшәйешебеҙҙең кәрәкһеҙ бер "йөгөнә" әүерелә бара. Был күренеш тормоштоң барлыҡ өлкәләренә лә ҡағыла. Беренсе планға "берҙе биш итеү" тигән баҙар фәлсәфәһе ҡуйыла. Бына ошондай шарттарҙа быйыл үҙенең 80 йәшен тултырыусы Рәсәй Фәндәр Академияһының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты нисек йәшәй һуң? Рәсәй Фәндәр Академияһының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, филология фәндәре докторы Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА, филология фәндәре докторы, әҙәбиәт ғилеме бүлеге мөдире Миңлеғәле НӘҘЕРҒОЛОВ, филология фәндәре кандидаты, фольклористика бүлеге мөдире Гөлнур ХӨСӘЙЕНОВА менән әңгәмәбеҙҙә был һорауға яуап алырға тырышырбыҙ.**

**▸ Фән, ғилем тәжрибәгә, икенсе төрлө әйткәндә, аҡһаҡал аҡылына нигеҙләнә. Юғарыла килтерелгән ғибрәтле риүәйәткә бәйле һеҙ үҙегеҙ эшләгән институттың ниндәй проблемаларын әйтеп китерһегеҙ?**

**Ф. Хисамитдинова:** Был хәлде беҙ бигерәк тә быйыл институтыбыҙҙың 80 йыллыҡ юбилейын үткәргән көндәрҙә ныҡ тоябыҙ. 50 йыллығында институтыбыҙға Почет Билдәһе ордены биргәндәр, 75 йыллығында ла хеҙмәткәрҙәребеҙгә фатир, почетлы исемдәр, премия, институтҡа мини типография, машина биреп ныҡ ҙурланылар. Быйыл 80 йыллыҡты лайыҡлы үткәреү маҡсатында республика етәкселегенә мөрәжәғәт итергә булдым. Президентҡа рәхмәт, ул ниәтебеҙҙе хуплап, хатыбыҙға "Хупларға!" тип ҡул ҡуйып, Премьер-министр урынбаҫарҙарына төшөргән. Указдың проекты ла әҙер булды. Әммә проектты министрлыҡтар, ведомстволар аша үткәргәндә бик ҙур ҡаршылыҡтарға, әйткәндәй, йәш чиновниктарҙың тап менеджерлыҡ ҡаршылығына осраныҡ. Улар беҙгә "80 йыл юбилей түгел", "Институт беҙгә ҡарамай, федераль үҙәккә буйһона", "Һәр бер ведомство учреждениеһына ҡарар ҡабул итә башлаһаҡ..." тип яуап бирҙе. Мин уларға: "Беҙҙең институт һәр бер ведомство түгел, унда беҙҙең республиканың рухы тупланған. Беҙҙең республика Башҡортостан тип атала икән, уның рухи тупланмаһы булған институт та берәү генә..."- тип яуап бирҙем.

Былар менән нимә әйтергә теләйем: халыҡ рухын өйрәнеүсе беҙҙең институттың ғына түгел, ғөмүмән, милләт рухының әһәмиәтен аңламаған йәш быуын килде хәҙер власҡа. Беҙ уларға милләт рухының әһәмиәтен аңлата алмаһаҡ, бер көн килеп улар беҙҙең институтты ла ябып ҡуйыуы бар. Ил ҡарттарын юҡ иткән теге яуыз хан һымаҡ.

Бөгөн беҙҙең институт өс ҙур проект өҫтөндә эшләй. Беренсеһе - 36 томлыҡ "Башҡорт халыҡ ижады", беҙ әле уның 13 томын сығарҙыҡ. Икенсе ҙур проект - "Башҡорт халҡы тарихы"ның 7 томлығы, уны сығарыуҙа беҙҙең ғалимдар ғына түгел, Мәскәү, Петербург, Силәбе, Екатеринбург, Ырымбур, Пермь, Ҡаҙан ғалимдары ҡатнаша. Әле уның I, III, IV, V, VI томдары донъя күрҙе. Әлбиттә, был томлыҡтың бүлектәре төрлө кимәлдә эшләнгән, әммә институт хәҙер шул 7 томлыҡты яҙып ҡалдырһа, киләсәктә йәш быуын уны байытасаҡ, камиллаштырасаҡ. Был томлыҡтарҙы сығарыу юлында ҡаршылыҡтар күп. Башҡорт халҡының тарихы нисек ҡанлы, ҡатмарлы, ҡаршылыҡлы булһа, уны яҙыу һәм донъяға белдереү ҙә күп кенә ҡаршылыҡтар аша тормошҡа ашырыла. Өсөнсө йүнәлеш - 10 томлыҡ "Башҡорт теленең академик һүҙлеге", башҡа төрлө һүҙлектәр, шул иҫәптән этимологик һүҙлек сығарыу. Беҙ әле академик һүҙлектең I, II томдарын ҡулға алдыҡ.

**Г. Хөсәйенова:** Фәнгә, ғилемгә менеджерлыҡ күҙлеге аша ҡарау беҙҙең институт юбилейына ҡарата мөнәсәбәттә генә түгел, беҙҙең эшмәкәрлектә лә сағыла. Әле юбилейға арналған библиографияны төҙөп ултырабыҙ ҙа, бер хәлгә аптырайбыҙ. Сәнғәттә, мәҫәлән, ҡурайсылар, йырсылар, бейеүселәр, музыканттар һәм башҡалар булған кеүек, беҙҙә лә илленән ашыу белгес бар. Уларҙың һәр ҡайһыһы уникаль, алмаҫҡа торошло, әммә улар дәүләт иғтибарынан ситтә. Бына, мәҫәлән, фольклор фәнен үҫтереү өсөн экспедицияларға сығыу мотлаҡ кәрәк. Әммә беҙгә бының өсөн аҡса бүленмәй, Мәскәү беҙгә тик айлыҡ хеҙмәт хаҡы ғына түләй. Беҙ нисек теләйбеҙ, шулай аҡса табабыҙ ҙа, командировкаға, экспедицияға сығып китәбеҙ. Әгәр ҙә бер йыл экспедицияға сыҡмаһаҡ, беҙ күпме мәғлүмәт, тарихи материал юғалтабыҙ, сөнки оло быуын китә бит. Былтыр Мәскәүҙән тикшереүселәр килде. Улар: "Рәсәйҙә әле фольклор йәшәүен дауам иткән бармаҡ менән генә һанарлыҡ төбәктәрҙең береһе - һеҙ", - тине. Мәскәүҙән тағы бер коллегабыҙ: "Һеҙҙең халҡығыҙ ҡайһылай зирәк,"Бер - олоно, бер кесене тыңла", тигән мәҡәлегеҙ үк быны раҫлай. Бына беҙ Мәскәүҙә баш институтта ултырабыҙ, ә күп йәһәттән һеҙҙән артта ҡалғанбыҙ, һеҙ фольклор буйынса йыл һайын томдар сығараһағыҙ", - тине. Беҙҙә әле 80 йыл буйына йыйылған материалдар араһында тыңланмай ятҡан кассеталар ҙа бар. Уларҙы ҡағыҙға күсереү өсөн мөмкинлек, финанс кәрәк. Әлбиттә, башҡорт фольклоры белгестәре был яҡтан маҡтауға ғына лайыҡ, йыйып ҡайтҡан материалдарҙы тиҙерәк эшкәртеү яғын ҡарайҙар.

**Ф. Хисамитдинова:** Беҙ фольклорсылар йыйып алып ҡайтҡан материалдарҙы китап итеп сығарабыҙ ҙа, һатабыҙ, уның аҡсаһына яңыһын сығарабыҙ. Шулай итеп, үҙ йүнебеҙҙе үҙебеҙ күрәбеҙ.

**М. Нәҙерғолов:** 90-сы йылдарҙа "Башҡорт әҙәбиәте тарихы"ның 6 томлығын баҫтырып сығарһаҡ, әле 7-се том өҫтөндә эшләйбеҙ. Ул совет осоронан һуңғы осор әҙәбиәтен үҙ эсенә ала. Башҡорт әҙәбиәтенең боронғо дәүерҙән алып XX быуаттың 80-се йылдарына тиклемге осорон урыҫ телендә 3 томлыҡ итеп әҙерләнек әҙерләүгә, әммә һаман да баҫтыра алмайбыҙ. Кемдәргә генә хат яҙылманы, әммә 2007 йылдан бирле мәсьәлә хәл ителмәй. "Башҡорт әҙәбиәте тарихы" 1977 йылда урыҫ телендә сығарылған, ул совет осоронда сығарылғанға күрә идеологик йәһәттән иҫкергән. Әлеге ваҡытта Екатеринбургта "Урал халыҡтары әҙәбиәте" күп томлығы әҙерләнә. Уның тәүге томына урыҫ һәм башҡорт әҙәбиәте генә инәсәк. Шул уҡ ваҡытта әле Төркиәлә инглиз телендә "Башҡорт милләтенең мәҙәниәт тарихы" тигән китапты сығарыуға әҙерләйбеҙ. Беҙгә унда ҙур ғына урын бирәләр. Сит тарафтарҙа беҙҙең китаптарға юл бар, улар башҡорт әҙәбиәтенең боронғо әҙәбиәт икәнлеген таный, күпме конференцияларға саҡырып баһа бирәләр, ә үҙебеҙҙә ҡуҙғалыш юҡ. Хәҙер, мәҫәлән, яҙыусыларҙың китаптарын күп томлы итеп сығарыуҙы өҫтөнөрәк күрәләр. Әммә улар араһында бөтөнләй уҡырлыҡ булмағандары ла байтаҡ. Беҙ үҙебеҙҙең мөмкинлектән сығып халыҡҡа кәрәкле китаптар баҫтырабыҙ, әммә уларҙың тиражы бәләкәй, бөтөн ергә лә барып етмәй.

Беҙҙең институтта бик бай ҡулъяҙмалар һәм боронғо китаптар фонды бар. Улар хәҙер алты мең ярым берәмектән артып китте. Беҙ уларҙы уҡыйбыҙ, электрон каталогтарға индерәбеҙ, оцифровка, реставрация эше алып барабыҙ. Һуңғы йылдарҙа ҡулъяҙмалар, иҫке китаптар йыйыу буйынса экспедициялар ойоштора башланыҡ. Бына Балаҡатай, Ҡыйғы райондарының бер өлөшөн йөрөп сыҡтыҡ, унда бик ҡыҙыҡлы материалдарға юлыҡтыҡ. 2010 йылда Мәсетле районын тулыһынса йөрөп сыҡтыҡ. Әле халыҡта боронғо яҙма ҡомартҡылар бар. Уларҙы йыйыу менән бер рәттән, фольклор материалдарын да туплайбыҙ.

Әлеге ваҡытта беҙ институтта һаҡланған яҙма ҡомартҡыларҙың 20 процент самаһын ғына өйрәнгәнбеҙ. Баһалап бөткөһөҙ ҡиммәтле байлығыбыҙҙың иң ҙур өлөшө әле өйрәнелмәгән. Элек ул фондты тегендә-бында типкеләп йөрөттөләр. Был шулай уҡ менеджерлыҡ касафаты. Тәүҙә уны институттан айырып алып, Ленин мемориалындағы яҙма ҡомартҡыларҙы һаҡлау шарттарына тура килмәгән бер ағас йортҡа урынлаштырҙылар. Унан һуң Киров урамындағы 15-се һанлы йортҡа, аҙаҡ тағы ла икенсе бер бүлмәгә күсерҙеләр. Хәҙер фонд 5-се урынға күсерелде. Ундай китаптарҙың ҡәҙерен, әһәмиәтен аңлаған кеше уларҙы урынынан ҡуҙғатырға тейеш түгел. Ә беҙ уларҙы бәйләп, машиналарға тейәп ташый, урынынан күсерә торғас, байтағы бөтөнләй тәләфләнеп тә бөткәндер, тип ҡурҡам. Беҙҙә XIV быуатҡа ҡараған ҡулъяҙмалар, күп кенә күренекле шәхестәребеҙҙең үҙ ҡулдары менән яҙған әҫәрҙәре бар. Ғәли Соҡоройҙың, Утыҙ Имәниҙең, Аҡмулланың, М. Өмөтбаевтың, Ғарифулла Кейековтың һәм башҡаларҙың ҡулъяҙмалары ла һаҡлана. Риза Фәхретдиновтың 42 томлыҡ мираҫы үҙе генә ни тора! Риза Фәхретдиновтың "Аҫар"ын ике китап итеп сығарҙыҡ, әлеге ваҡытта "Йыуаныс" тигән әҫәренең беренсе китабын баҫтырҙыҡ, икенсеһен әҙерләйбеҙ.

*Әлеге ваҡытта беҙ институтта һаҡланған яҙма ҡомартҡыларҙың 20 процент самаһын ғына өйрәнгәнбеҙ. Баһалап бөткөһөҙ ҡиммәтле байлығыбыҙҙың иң ҙур өлөшө әле өйрәнелмәгән. Элек ул фондты тегендә-бында типкеләп йөрөттөләр. Был шулай уҡ менеджерлыҡ касафаты. Тәүҙә уны институттан айырып алып, Ленин мемориалындағы яҙма ҡомартҡыларҙы һаҡлау шарттарына тура килмәгән бер ағас йортҡа урынлаштырҙылар. Унан һуң Киров урамындағы 15-се һанлы йортҡа, аҙаҡ тағы ла икенсе бер бүлмәгә күсерҙеләр. Хәҙер фонд 5-се урынға күсерелде. Ундай китаптарҙың ҡәҙерен, әһәмиәтен аңлаған кеше уларҙы урынынан ҡуҙғатырға тейеш түгел. Ә беҙ уларҙы бәйләп, машиналарға тейәп ташый, урынынан күсерә торғас, байтағы бөтөнләй тәләфләнеп тә бөткәндер, тип ҡурҡам.*

**▸ Һеҙҙең институттың ете бүлеге эшмәкәрлегендә халҡыбыҙҙың тарихы ниндәй кимәлдә өйрәнелгән?**

**Ф. Хисамитдинова:** Һәр бүлектең үҙенә тәғәйен йүнәлеше бар. Этнография бүлеге халҡыбыҙҙың килеп сығышы, традицион мәҙәниәте, антропология мәсьәләләрен өйрәнә. Беҙҙең халыҡтың матди мәҙәниәте ниндәйҙер кимәлдә өйрәнелгән, ә рухи мәҙәниәтен өйрәнеү башланып ҡына тора. Миңлеғәле Хөсәйен

***✓ Бына нисә йыл инде фольклор буйынса аспирантураға килмәйҙәр, сөнки фольклор уҡытыусыһы булмағас, был өлкә буйынса диплом да яҙҙырмайҙар. Халыҡ ижадына ҡарата мөнәсәбәтте тамырынан үҙгәртергә кәрәк.***

# АҪЫЛТАШ... күңелендә ята

улы әйткәнсә, яҙма ҡомартҡыларыбыҙҙың 80 процент самаһы һаман да өйрәнелмәй ятыуы беҙҙең белем биреү системаһындағы етешһеҙлектәрҙән килеп сыға. Ғәрәп, фарсы телдәрендә, ғәрәп графикаһында яҙылған рухи байлыҡты уҡырлыҡ белгестәр юҡ кимәлендә. Уҡый белгәндәре лә бик аҙ. Сөнки шул уҡ филология факультетын тамамлап килгән белгестәребеҙ был белемдән бик алыҫ тора. Ул телдәрҙе, хатта графиканы тарихсылар, этнографтар, филологтар барыһы ла белмәй. Ә беҙ кадрҙарҙы ҡайҙан алабыҙ һуң? Әлбиттә, юғары уҡыу йорттарынан. Әгәр ҙә университеттың тарих, филология факультеттарында боронғоно һәм иҫке төркисәне, ғәрәп, фарсы телдәрен, графиканы тейешле кимәлдә өйрәнһәләр, ҡулъяҙмаларҙы өйрәнеү ҙә алға китер ине. Ундай белгестәр булһа, бик теләп эшкә алыр инек.

"Башҡорт халҡының тарихы" күп томлығы өҫтөндә эшләгәндә күп авторҙар, ғәҙәттәгесә, урыҫ телендә яҙылған сығанаҡтар менән эшләне. Әммә улар ғәрәп, фарсы телендә, иҫке төркисә яҙылған сығанаҡтар менән эшләй алманы. Күп кенә тарихсылар мәктәптә, юғары уҡыу йортонда русса уҡыу сәбәпле, хатта хәҙерге графика менән яҙылған башҡорт сығанағы менән дә эш итә алмай. Әлбиттә, быының үҙ сәбәптәре, әммә был проблема бар. Был бер беҙҙең институттың ғына бәләһе түгел. Ҡыҫҡаһы, көнсығыш телдәрен белмәү арҡаһында бөтә бүлектәр ҙә сифатлы эшләй тип әйтеп булмай әлегә. Быының менән мин беҙҙең институт бер нәмә лә эшләмәй, тип әйтә алмайым. Ул хәленән килгәнсә эшләй. Беҙ хәҙер юғары уҡыу йорттары биреп еткермәгән белемде үҙебеҙ уҡытырға тырышабыҙ. Мәҫәлән, Миңлеғәле Нәҙерғолов иҫке төркисәне өйрәтеү курсы асты. Ҡыҫҡаһы, институт һәр ваҡыт үҫеш юлында.

**Г. Хөсәйенова:** Хәҙер университетта Кирәй Мәргән, Әхмәт Сөләймәнов кеүек фольклор уҡытҡан профессионалдар юҡ. Филологияның тел, фольклор һәм әҙәбиәт өлкәләрен үҙ эсенә ала икәнен дә аңламай хәҙерге студенттар. Бына нисә йыл инде фольклор буйынса аспирантураға килмәйҙәр, сөнки фольклор уҡытыусыһы булмағас, был өлкә буйынса диплом да яҙҙырмайҙар. Халыҡ ижадына ҡарата мөнәсәбәтте тамырынан үҙгәртергә кәрәк.

**▶ Боронғо текстарҙы уҡыуҙың ниндәйҙер айырым системаһы ла барҙыр?**

**М. Нәҙерғолов:** Беҙ боронғо тексты башҡорт теле грамматикаһы күҙлегенән сығып уҡыйбыҙ. Былтыр Ҡаҙанда бер түңәрәк ҡорҙа ҡатнашҡайным. Унда Мәскәүҙән, Кавказдан, Питерҙан ҡунаҡтар килде. Мин сығыш яһағандан һуң оло ғына бер татар ғалимы мине "Боронғо текстарҙы дөрөҫ уҡымайһығыҙ", тип тәнҡитләп маташты. Мин уға: "Һәр халыҡ ғәрәп, иҫке төрки телдәрендәге тексты үҙенең теле юҫығынан сығып уҡый. Бер үк һүҙҙе татар үҙенсә, ҡаҙаҡ үҙенсә, беҙ, башҡорттар, үҙебеҙсә уҡыйбыҙ. Беҙҙең үҙебеҙҙең тел графикаһы системаһы, һеҙҙә булмаған "ғ", "ҙ", "ҫ", "һ" өндәре бар. Беҙ һеҙгә ҡарағанда текстарҙы еңелерәк тә уҡыйбыҙ. Ғөмүмән, башҡорт теле ғәрәп, инглиз телендәге яҙмаларҙы уҡырға бик ҡулайлы", - тип яуап бирҙем. Ысынлап та, татар, ҡаҙаҡ телдәрендә беҙҙәге һәм ғәрәп телендәге үҙенсәлекле өндәр булмағас, улар бер өндө бер нисә хәреф аша белдерә, йә шундай хәрефтең барлығын белдерер өсөн өҫтәмә билдә ҡуя. Беҙ хәҙер боронғо текстарҙы уҡыуҙың үҙ системаһын булдырҙыҡ, йәғни беҙ уларҙы үҙебеҙҙең тел юҫығынан сығып уҡыйбыҙ. Беҙҙең тел, татар теленән айырмалы рәүештә, ғәрәп, фарсы һүҙҙәрен боҙмайынса яҙырға һәм уҡырға мөмкинлек бирә.

**▶ Билдәле яҙыусы һәм тарихсы Йыһат ағай Солтановтың фатирында булғанда, ул кәштәлә торған бер китапты асып, унда яҙылғанды уҡытып күрһәтте. Ул урыҫ ғалимдарының Ҡытай тарихы буйынса яҙылған китабы булып сыҡты, Мәскәүҙә донъя күргән. Ағайҙың миңә күрһәткән өлөшөндә "...беҙгә (ҡытайҙарға - Ә.Ғ.-Ү.) көнбайыштан килеүсе йүкә билбаулы басилдар (башҡорттар) дәүләт төҙөп бирҙе..." тигән һүҙҙәр яҙылғайны. Быының менән нимә әйтергә теләйем: беҙ әле тарихыбыҙҙы, асылда, урыҫ, ғәрәп, фарсы сығанаҡтары буйынса ғына өйрәнәбеҙ. Ә бит донъяла тағы ла Европа, Азия, Ҡытай архивтары ла бар. Ғөмүмән, башҡорт халҡы тарихының өйрәнелмәгән өлөшө күпмерәк тип уйлайһығыҙ?**

**Ф. Хисамитдинова:** Әлеге ете томлыҡ бөгөнгә өйрәнелгән сығанаҡтарға ғына нигеҙләнеп яҙыла. Миңлеғәле Хөсәйен улы әйткәнсә, сығанаҡтарыбыҙҙың 20 проценты өйрәнелгән икән, беҙ шул кимәлдә генә яҙа алабыҙ. Беҙ әле "Өйрәндек" тигән ғәрәп, урыҫ, фарсы, венгр һәм башҡа сығанаҡтарҙың да бер өлөшөнә генә күҙ һалынған. Йыл һайын беҙ ниндәйҙер асышҡа юлығабыҙ. Бер аҙ финанс мөмкинлеге сығыу менән томлыҡтарҙы яҙыуҙа ҡатнашҡан ғалимдарҙы мин архивтарға командировкаларға ебәрҙем. Ғалимдар Рәсәй ҡалаларынан тыш, Венгрияла, Германияла, Төркиәлә, Үзбәкстанда, Ҡаҙағстанда – барлығы 72 ҡаланың архивында эшләнеләр. Улар был илдәрҙең һәм ҡалаларҙың архивтарында башҡорт милләтенә ҡағылған сығанаҡтарҙың хәтһеҙ күп булыуы хаҡында белдерҙе. Әле Ҡытай ғына түгел, хатта үҙебеҙҙең илдең архивтарындағы материалдарҙы өйрәнергә кәрәк әле беҙгә. Тимәк, киләсәктә башҡорт тарихын яҙыу дауам итәсәк һәм ул ете томдан да күпкә артасаҡ һәм тулыланасаҡ.



Ете томды яҙҙың да, эш бөттө, тип әйтеп булмай. Институтта башҡорт халҡы, Башҡортостан тарихы тәүге йылдарҙан уҡ яҙыла. Мәҫәлән, С.К. Руденко, Н.К. Дмитриев та үҙҙәренең классик эштәрен яҙғанда беҙҙең институт уларға ярҙам иткән. С.К.Руденконың эшен һуңынан Р.Ғ.Кузеев, Н.В. Бикбулатов дауам иткән. Ҡыҫҡаһы, республикабыҙ фәненең һәр өлкәһенә беҙҙең институт йүнәлеш биргән. Улай ғына түгел, милләтебеҙҙең дәүләтселек нигеҙе беҙҙең институт тарафынан формалаштырыла. Хәҙерге ваҡытта 500 данала фоноваликта боронғо йырҙарыбыҙ тупланған, уларҙың 267-һе үҙебеҙҙә, ҡалғаны Санкт-Петербургта һаҡлана. Улар 20-се йылдарҙа йыйылған. Күренеүенсә, шул замандарҙа профессиональ сәнғәтебеҙгә, декоратив, һынлы сәнғәткә нигеҙ һалынған. Шуға күрә беҙҙең институтты башҡалар менән сағыштырып йә йәнәш ҡуйып булмай, сөнки башҡорт милләте, Башҡортостан мәнфәғәтенә академик кимәлдә хеҙмәт иткән берҙән-бер институт ул донъяла.

**Г. Хөсәйенова:** Беҙҙе төрлө эксперт комиссияһы, жюри эштәренә йәлеп итәләр. Беҙгә шәжәрә төҙөү өсөн дә ҡайҙан ғына мөрәжәғәт итмәйҙәр. Һәр төрлө конкурстарҙа, фестивалдәрҙә, халыҡ ижады байрамдарында, ғилми конференцияларҙа беҙ белгес булараҡ, дәүләт эксперты вазифаһын үтәйбеҙ. Беҙҙең бүлек халыҡ ижадын өйрәнеүҙе дауам итә икән, бер ваҡытта ла беҙҙең эштең осо-ҡырыйы булмаясаҡ. Беҙ халыҡтыҡын йыйып алабыҙ ҙа, халыҡтың үҙенә ҡайтарып бирәбеҙ. Беҙҙең әле тылсымлы һәм хайуандар тураһындағы әкиәттәр буйынса монографиялар донъя күрмәгән, әкиәттәребеҙҙең структураһы, балалар фольклоры, халыҡ медицинаһы ентекле өйрәнелмәгән әле, йәғни эш муйындан.

**Ф. Хисамитдинова:** Беҙҙең институт әле "Урал батыр" эпосын һәм уға ҡараған эпостар циклын ЮНЕСКО-ға тәҡдим итеү өҫтөндә эшләй. Беҙ әле ул документтың фәнни нигеҙен әҙерләйбеҙ.

**▶ "Урал батыр" эпосын фольклор әҫәре кимәленән башҡорт милләтенең мифологик эпик ҡомартҡыһы кимәленә күтәреү була инде уны ЮНЕСКО-ла теркәү. Шулай түгелме?**

**Г. Хөсәйенова:** Мөхәмәтша Буранғолов эпосты яҙып алған, әммә уны һөйләгән кешеләрҙең тауышы яҙылған кассета һаҡланмаған. Ә беҙҙән ошондай яҙма талап итәләр. Шуға күрә лә уны йөкмәткеһе буйынса башҡорт халҡының мифологик эпосы булыуына ҡарамаҫтан, фольклор әҫәре, тип әйтәбеҙ.

**Ф. Хисамитдинова:** Бөгөн беҙҙең фольклор бүлеге белгестәре ҡайҙандыр кемдәндер нимәнеләр яҙып алған кеүек, беҙ ҙә "Урал батыр"ҙы кемдәндер яҙып алырға тейеш булабыҙ. Яҡуттарҙың нисек итеп үҙҙәренең "Олонхо"ларын башҡарыуын ишеткәндән һуң, миндә Санкт-Петербургта ятҡан фоноваликтарҙан "Урал батыр" эпосының Буранғолов эшләгән яҙмаһын эҙләү теләге тыуҙы. Фоноваликтарҙы яңғыратыу өсөн күп аҡса һорайҙар. Ә үҙебеҙҙә ундай аппаратура юҡ. Аппратуралар сит илдә һәм Санкт-Петербургта ғына бар. Бында дәүләт ярҙамынан тыш бер нәмә лә эшләп булмай. Кем белә, бәлки, эпостың яҙма варианты шунда яталыр.

**Г. Хөсәйенова:** Элек магнитлы таҫма етмәү арҡаһында икенсе әҫәрҙе яҙҙырыр өсөн тәүге яҙмаларҙы юйҙырып барғандар. Салауат Галин әйтеүенсә, "Заятүләк менән Һыуһылыу" кеүек күп кенә эпостарҙың катушкаға яҙылған вариантын ул бер тапҡыр ғына радиола яңғыратҡан һәм яҙма фондтан юғалған. Яҙмаларҙы юйҙырыусылар уларҙың ҡағыҙға төшкән варианты һаҡланһа - еткән, тип уйлап ҙур хата яһаған.

**▶ Күп кенә эпостарыбыҙ, халыҡ ижады өлгөләре, боронғо йырҙар ситтәр тарафынан үҙләштерелә. Был йәһәттән дә ситтәрҙең менеджерлыҡ эшмәкәрлеге күҙәтелә. Ошондай хәлдәр күҙәтелгәндә лә беҙҙең был байлыҡтарыбыҙ өсөн яуаплы булған министрлыҡ һәм ундағы белгестәр ҡыл да ҡыбырҙатмай. Ә бына һеҙ, халҡыбыҙҙың ошондай гәүһәрҙәре өсөн яуаплы урында эшләүселәр булараҡ, бындай күренештәргә дәғүә белдергәнегеҙ бармы?**

**Ф. Хисамитдинова:** Беҙгә төрлө тарафтарҙан килеп, байлыҡтарыбыҙҙың күсермәләрен алырға тырышыусылар бар. Был осраҡта беҙ үҙебеҙҙең байлыҡты, беренселлекте һаҡлап ҡалырға тырышабыҙ. Бына яңыраҡ, мәҫәлән, Риза Фәхретдиновтың рухи мираҫын үҙләштерергә теләүселәр табылды. Был хаҡта, Миңлеғәле Хөсәйен улы, һеҙ һөйләп китегеҙ.

***Яҙма ҡомартҡыларыбыҙҙың 80 процент самаһы һаман да өйрәнелмәй ятыуы беҙҙең белем биреү системаһындағы етешһеҙлектәрҙән килеп сыға. Ғәрәп, фарсы телдәрендә, ғәрәп графикаһында яҙылған рухи байлыҡты уҡырлыҡ белгестәр юҡ кимәлендә. Уҡый белгәндәре лә бик аҙ. Сөнки шул уҡ филология факультетын тамамлап килгән белгестәребеҙ был белемдән бик алыҫ тора. Ул телдәрҙе, хатта графиканы тарихсылар, этнографтар, филологтар барыһы ла белмәй. Ә беҙ кадрҙарҙы ҡайҙан алабыҙ һуң? Әлбиттә, юғары уҡыу йорттарынан. Әгәр ҙә университеттың тарих, филология факультеттарында боронғоно һәм иҫке төркисәне, ғәрәп, фарсы телдәрен, графиканы тейешле кимәлдә өйрәнһәләр, ҡулъяҙмаларҙы өйрәнеү ҙә алға китер ине. Ундай белгестәр булһа, бик теләп эшкә алыр инек.***

**(Дауамы 10-сы биттә).**

***"Бер генә дәүләт тә үҙендә булған архив документын башҡаға был рәүешле итеп бирмәй. Был енәйәткә тиң..." - тип әйттек. Ҡаҙан яғынан беҙҙең архив документтарын үҙләштереү эштәре электән үк барған.***



**(Башы 8-9-сы биттәрҙә).**

**М. Нәҙерғолов:** Үткән көҙ беҙҙең Өфө ғилми үҙәге етәксеһенә Ҡаҙандан Риза Фәхретдиновтың бөтөн ҡулъяҙмаларының күсермәһен ебәреүҙе һорап хат яҙҙылар. Етәксебеҙ тиҙ арала эшләп ебәреүҙе ҡушып, был хатҡа ҡул ҡуйған. Беҙгә йыйылышып етәксебеҙгә инеп, хәлде аңлатырға тура килде. Беҙ уға: "Бер генә халыҡ, бер генә республика, дәүләт тә, хатта ҡала үҙендә булған архив документын башҡаға был рәүешле итеп бирмәй. Был енәйәткә тиң..." - тип әйттек. Ҡаҙан яғынан беҙҙең архив документтарын ҡулға төшөрөү, үҙләштереү эштәре электән үк барған, әле шуны дауам итмәксе булалар.

Екатеринбург архивында эшләгәндә өс битлек ҡулъяҙманы фотоға төшөрөп алырға һораныҡ. Беҙҙән ул саҡтағы хаҡ менән 180 һум аҡса һоранылар. Заманында милли китапхананың һирәк китаптар бүлегенән бик күп китаптарҙың менеджерҙар тарафынан ситкә һатылғанын да беләбеҙ. Минең тыуған Йылайыр районынан да "Урал тарихы" тигән ҡулъяҙма ситкә һатылды. Шул уҡ Ҡаҙанда һәм башҡа урындарҙа беҙгә ҡайһы бер ҡулъяҙмаларҙы бөтөнләй күрһәтмәйҙәр. Беҙ уларҙы хатта ҡулға алып ҡарау хоҡуғынан да мәхрүмбеҙ.

**Ф. Хисамитдинова:** Барыһын да кадрҙар хәл итә шул. Архивтарҙа, китапханаларҙа бындай ҡомартҡыларҙың халҡыбыҙҙың тиңһеҙ байлығы икәнлеген аңлаған кешеләр ултырһа, уларҙың әләф-тәләф ителмәүенә, ситкә китмәүенә юл ҡуймаҫҡа булалыр, тим. Бер йыл Ринат Йосопов етәкселегендәге экспедиция Һарытау өлкәһенә, үҙебеҙҙең Яңауыл районына сыҡты. Был урындарҙа Ҡаҙандан да килеп киткәндәр булып сыҡты. Беҙ бына шулай бер ниндәй рөхсәтһеҙ үҙебеҙҙең территорияға ситтәрҙе индерәбеҙ. Был йәһәттән беҙ урындағы хакимиәт етәкселәренә, дәүләт органдарына дәғүә белдерергә хаҡлыбыҙ, тип уйлайым. Бөгөн беҙ үҙебеҙ, мәҫәлән, Татарстандың Мөслим районына барып материал йыя алабыҙмы? Йәш ғалим Рәфил Аҫылғужин Минзәлә тарафтарына барып төшөү менән янына милиция хеҙмәткәрҙәре килеп етеүе хаҡында һөйләгәйне. Йәғни уларҙа дәүләт органдары уяу һәм ситтәрҙе муниципаль районға индереп бармай. Бына шуның өсөн дә ул тарафтарҙағы 300 мең башҡорт, башҡорт сығышын белә тороп, үҙен татар тип яҙҙыра ла инде. Мәрхүм Ринат Мөхәмәт улы Дүртөйлөнән бер ҡыҙҙы аспирантураға уҡырға алғайны. Уның кандидатлыҡ диссертацияһының темаһы көнсығыш Татарстандың Минзәлә өйәҙе тарихына арналған. Әммә ул был төбәктә тик уларҙың вәкиле оҙатыуында ғына йөрөй алған. Ә беҙгә Татарстандың ғалимдары ла, артистары ла килә, контроль дә юҡ, хатта уларҙың килгәнен дә белмәй ҡалабыҙ. Уларҙы беҙгә кем индерә: мәҙәниәт министрлығымы, әллә район етәкселегеме? Әллә улар бөтөнләй рөхсәт тә һорап тормаймы? Әгәр ҙә беҙ был мәсьәлә буйынса үҙебеҙҙең ҡарашты үҙгәртмәһәк, халҡыбыҙҙың быуаттар төпкөлөнән килгән байлығы шул менеджерҙар ҡулына эләгәсәк инде. Шуға ла ауылдарҙа йәшәүсе халҡыбыҙҙы, һәр үткенсегә серен асып, барыһын һөйләп, булған ҡомартҡыларын тапшырып ултырмаһын ине, тип тә иҫкәртке килә.

Тағы ла бер мөһим мәсьәлә хаҡында әйтмәй булмай. Һәр ауыл хәҙер документтар менән тулыландырып, шәжәрә китаптары сығара башланы. Уларҙа, асылда, шулай яҙалар: "Имеш, ауылға шул-шул йылда Ҡаҙан яғынан ике кеше килгән дә, беҙҙең ауылға нигеҙ һалған..." Был күрәләтә алдашыу. Мин уларға: "Бына бит һеҙҙең архив материалдарығыҙ бөтөнләй икенсе турала һөйләй. Был ауылда бит ул ике кеше килгәндә 30-40 башҡорт ғаиләһе булған, һеҙ уларҙың тарихын түгел, килеп ултырғандарҙың тарихын яҙғанһығыҙ", - тип, үҙ дәғүәмде белдерәм. Район етәкселәре алдында сығыш яһағанда мин артабан бындай китаптарҙың тарихсы ғалимдар рецензияһы нигеҙендә генә баҫтырылырға тейешлеген әйтеп киткәйнем. Юғиһә, ошо форсатты файҙаланып, кемдәрҙер үҙенә сәйәси база яһарға тырыша.

**М. Нәҙерғолов:** Былтыр Краснокама районында "Шәжәрә байрамы" үткәрҙек. Шунда Татарстандың Аҡтаныш районынан 40-лаған кешенең килеүе көтөлә ине. Килмәнеләр, баҡтиһәң, уларҙы урындағы власть ныҡлап тыйып ҡуйған икән.

**Г. Хөсәйенова:** Әле Ҡорған өлкәһе башҡорт ауылдарында һаҡланған боронғо милли кейемдәрҙе һатып алырға теләүселәр күбәйгән. Бер комплект милли кейемгә хатта 500 мең һум биреп һорайҙар икән...

**▸ Киләсәк башҡортон формалаштырыуҙа һеҙҙең институттың роле нимәгә ҡайтып ҡала тип уйлайһығыҙ?**

**Ф. Хисамитдинова:** Башҡортлоҡ ниндәй компоненттарҙан торһа, уларҙың барыһы ла беҙҙең институттың ете бүлегенең эшенә бәйле. Санаторийҙа булғанда мин зыялылар төркөмөнә ҡарамаған милләттәштәребеҙҙең минең менән һаулыҡ һорашыуына иғтибар иттем. Бер бабай мине күреү менән илап ебәрҙе лә: "Һеҙҙе күрер көнөм дә бар икән. Һеҙ бит беҙгә халҡыбыҙ тарихы тураһында беҙ аңламаған күп нәмәләрҙе аңлаттығыҙ", - тине. Әйткәндәй, ул төньяҡ-көнбайыш башҡорто ине. Беҙҙе аңлайҙар, әммә был аңлауҙы беҙгә йәш быуынға тапшырырға кәрәк.

Мин беҙҙә йәшәгән сит милләт вәкилдәренә шулай тием: "Һеҙҙе башҡорт милләте барығыҙҙы ла үҙ еренә һыйҙырып, бер кемегеҙҙе лә ситһенмәй йәшәтә икән, был уның күңел бөйөклөгө тураһында һөйләй. Беҙ бөгөн халҡыбыҙ үҙе аңлап бөтмәгән рухты ғилми хеҙмәттәр, китаптар аша үҙенә ҡайтарабыҙ һәм был хеҙмәтебеҙ менән республикабыҙҙағы дуҫлыҡ хаҡына хеҙмәт итәбеҙ..." Беҙҙең институт ғилми ойошма, фәнни учреждение ғына түгел. Ул тыуған ил, тыуған тел, рух, атай-әсәй кеүек изге бер урын. Халыҡ беҙгә өмөт итеп бағып тора.

**М. Нәҙерғолов:** Санкт-Петербургтың көнсығышты өйрәнеү институты фондында Һибәтулла Сәлихов тигән башҡорт ғалимының 10 ҡулъяҙмаһы ята. Ул үҙ хеҙмәттәрендә башҡорт халҡының, Башҡортостандың, төбәктең тарихын яҙған, хатта башҡорт-урыҫ мөнәсәбәттәрен дә тасуирлаған. Тик был хеҙмәттәрҙе беҙҙең тарихсылар ҡулына алып уҡығаны бармы икән? Ғөмүмән, хәҙерге башҡорт тарих фәне кириллицаға нигеҙләнгән тексты ғына тасуирлай. Әммә беҙҙең ата-олатайҙар яҙып ҡалдырған ҡомартҡыларҙы өйрәнеү, шулар нигеҙендә тарихи ваҡиғаларҙы, шәхестәрҙе көүҙәләндереү бөтөнләй юҡ. Халҡыбыҙ теге йәки был тарихи ваҡиғаны үҙ күҙлегенән сығып нисек яҙҙы икән - был турала уйлау юҡ хәҙерге тарихсыларҙа. Бик аяныслы хәл. Беҙҙең университетта ғәрәп яҙмаһындағы тексты уҡый алырлыҡ та олпат ғалимдарыбыҙ булмауы ҡыҙғаныс.

**Ф. Хисамитдинова:** Вадим Трепавлов үҙенең "Аҡ батша" тигән китабында "Һәр бер халыҡтың үҙенең ҡарашы менән яҙылған тарихын табырға кәрәк", тип яҙа. Ысынлап та, уның һүҙҙәрендә хаҡлыҡ бар. Һәр кеше, һәр халыҡ үҙ яҙмышын да, үҙ тарихын да үҙе яҙырға тейеш...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Һәр халыҡтың үҙ Карамзины ғына түгел, уның үҙ институты булыуы ла мотлаҡ", тип өҫтәргә генә ҡала юғарылағы әңгәмәне тыңлағандан һуң. Ысынлап та, һәр милләттең, һәр дәүләттең үҙ атрибуттары һәм институттары булырға тейешлеген иҫәпкә алып, бынан 80 йыл элек барлыҡҡа килгән был Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты. Бөгөн ул оло тәжрибәле аҡһаҡал йәшенә етте. Беҙ туҡтауһыҙ әрләгән, тәнҡитләгән совет власы был хәҡиҡәтте хәҙерге менеджерҙарға ҡарағанда ныҕыраҡ аңлаған. Ә бит 80 йыл ғүмерендә ниндәй генә юғалтыуҙар кисермәгән, ауырлыҡтар үткәрмәгән был ғилми ойошма. Амантайҙары атылһа ла, ҡомартҡылары һатылһа ла, ил күргәнде күреп, ил халҡы кисергәнде кисереп, XXI быуатҡа аяҡ баҫҡан икән, уның киләсәге бар һәм ул милләтебеҙ киләсәге һымаҡ яҡты буласаҡ. Амин, шуны теләйек!**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

# ҺӘР ЗАМАНДЫҢ ҮҘ РӘМИЙЕМЕ?

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишерелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



**Тимер НИӘТШИН, шағир, Мәләүез ҡалаһы:** Борон-борондан ижадсы тигән һүҙҙең абруйы юғары булған. Яҙмышың ниндәйҙер ҡалыптарға, тапалған юлдарға, ҡанундарға буйһонғанда ла, ошо һанап үтелгәндәрҙән юғарыраҡ күтәрелә алмайһың икән, һине ижадсы тип атап булмай. Минең уйымса, ниндәйҙер яңы һүҙ, яңы образ, яңы музыка тыуҙырғандар, быға хәтлем булмағандарҙы барлыҡҡа килтергәндәр генә - ижадсы ул. Әгәр кеше ижад юлына баҫа икән, ул тапалған юлдан тайпылып, үҙенә бәләкәй генә һуҡмаҡ һала. Әгәр был һуҡмаҡ ышаныслы икән, был ижадсы артынан эйәреүселәр һуҡмаҡты юлға әйләндерә, кешелек тә шул юлдан бара башлауы мөмкин. Был - һирәктәргә генә эләгә торған бәхетле өлөш. Мәҫәлән, Рәми Ғариповты мин ысын ижадсы тип әйтә алам: ул башҡорт теле өсөн көрәш юлына баҫып, үҙ артынан бер дәүер яҙыусыларын эйәртә алды.

**Ғәлим ХИСАМОВ, яҙыусы:** Бөгөнгө башҡорт әҙәбиәтендә Рәми Ғарипов ижадына еткән ижад бармы? Ундай һорау урынлы түгелдер, минеңсә. Сөнки Рәми Ғариповтың - үҙ ижады, уның яҙыу ысулдары ла үҙенә генә хас, фекерләүе лә шулай уҡ үҙенсә. Шулай булғас, әҙиптәребеҙ ижадын да уның менән генә сағыштырып, Рәми ижадынан ҡайтыш был, тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ. Һәр кемдең мәҙәниәттә, әҙәбиәттә - үҙ өлөшө. Әлбиттә, Рәми Ғарипов ҙур ижад кешеһе ине. Ул үҙенең поэмаларын, шиғырҙарын йөрәккә үткәрерлек итеп яҙа, шул яғы менән башҡаларҙан айырыла ине. Төп айырма шунда - уның шиғырҙары, поэмалары, хатта көндәлектәре бик күп кешегә аңлайышлы һәм яҡын.

**Риф ТОЙҒОН, шағир, Башҡортостан Республикаһының Яҙыусылар союзы идараһы рәйесе:** Яҙыусылар төрлө заманда төрлөсә үҙгәреп тора. Хәҙерге яҙыусыларға рационаллек хас. Бөгөн ҡыҫҡа яҙырға тырышалар. Шулай уҡ яҙыусылыҡ эшенә белемле кешеләр килеүе ҡыуандыра. Заман, барыбер, һәр ижадсыға тәьҫир итә, шунһыҙ булмай ҙа. Һәр яҙыусының ижады аша ул йәшәгән осорҙо тулайым күҙ алдына килтереп була. Шулай ҙа яҙыусы үткән заманды ла сағылдыра белергә, киләсәккә фараздар ҙа яһай алырға тейеш. Ә Рәми ағайға килгәндә, ул - ҙур шағир. Ул ысын мәғәнәһендә халыҡ шағиры. Ул - беҙҙең шағирҙарыбыҙ өсөн өлгө, күрһәткес.

**Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ, академик:** Һәр замандың үҙ ижадсыһы була, тип ҡарайым мин. Мәҫәлән, Пушкин заманы, совет осоро, хәҙерге заман. Бөгөн заман бигерәк ҡатмарлы, яҙыусы кеше уны ныҕыраҡ үҙләштерергә тейеш. Шуныһы эсте бошора: күп яҙыусыларыбыҙ һаман элеккесә фекерләй, заман да, кеше характерҙары ла башҡасараҡ икәнен биреп еткерә алмай. Йәғни, яҙыусылар уҡыусыһына яңы заманға нисек яраҡлашырға икәнен әҫәрҙәре аша еткерә барырға, тимәк, замандан бер-ике аҙымға алдараҡ барырға тейеш. Ошо йәһәттән беҙ, әлбиттә, Рәми Ғариповты үҙебеҙгә өлгө итеп ҡуябыҙ. Уның һәр яҙғаны алтынға бәрәбәр.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Ошо көндәрҙә Башҡортостан Яҙыусылар союзының XVI сираттан тыш съезы булып үтте. Көн тәртибенә ике мәсьәлә сығарылды: союздың уставына үҙгәртеүҙәр индереү һәм яңы рәйес һайлау. Йәшерен тауыш биреүҙә үҙенең оппоненты -"Һәнәк" журналының баш мөхәррире Рәлиф Кинйәбаевтан күберәк тауыш йыйып, шағир Риф Тойғон Башҡортостан Яҙыусылар союзы идараһының яңы рәйесе итеп һайланды.**

***✓ Ысын күңелдән ышанып доғалар уҡыһаң, күп уҡыһаң, ҡан, йән таҙара, тиҙәр бит. Доға уҡылған һыу ҙа оҙаҡ боҙолмай, шифалы, сихәтле имгә әйләнә. Йәнә әхирәттәге рух-әруахтарҙы ризалау, хәйер биреү ҙә хәйерле.***




Эштәренән бушанып, ялға сығып, оло улы Ғәбит, ҡыҙы Ғәлиә менән кейәүе Тәлғәт тә Өфөнән килеп етте. Уларҙы күргәс, Сәғирә ҡарсыҡ бер аҙ йәнләнде. Дауахананың торошо ла, табиптарҙың кимәле, мөнәсәбәте лә ҡыуандырмай. Был күҙгә салынып тора. Бындай хөрт ханала ятып, ҡарсыҡҡа бөтөнләй хана булыуы ихтимал. Уны был тирәлә билдәле Аҡтау дауаханаһына һалырға ине. Ләкин унда сит тарафтан килгәндәрҙе ҡабул итеп бармайҙар. Әлбиттә, мөмкинлек бар. Тәлғәт тәүәккәлләп, ҡоҙаһына, һаулыҡ һаҡлау министры урынбаҫарына, шылтыратты, ул иһә - Аҡтау дауаханаһына. Баш табип Тәлғәткә телефондан ауырыуҙы остаздарҙың остазы Тамара Олеговна ҡараясағын белдерҙе.

- Ғәбит ҡайнаға, - тип өндәште Тәлғәт. - Инәйеңде минең еңел машинала алып барайыҡ Аҡтауға.

- Ашыҡма, кейәү. Улай ярамай. Махсус машина кәрәк.

- Нисек ярамай? Йомшаҡ, һелкетмәй. Шунан һуң ҡәйнәмдең бөтөнләй йөрәге ауыртҡанға оҡшамаған. "Ашығыс ярҙам" машинаһы, күрәһең, ватылып ултыра.

- Аҡтауҙан саҡырт.

Ҡайнағаһы, ҡаршылағы Арҡырытау һымаҡ арҡырыланғас, саҡыртырға, әммә оҙон-оҙаҡ көтөргә тура килде. Һәр кемгә үҙ туҡһаны туҡһан, әйҙә, күңеле булһын, тип уйланы Тәлғәт. Ғәбит - сетерекле холоҡло кеше, яҡшылығы ла аламалығы ла бергә уҡмашҡан унын. Үҙ бизмәне менән генә үлсәй, йәғни үҙ ҡарашынан ғына сығып баһа бирә. Нишләйһең, әҙәм фәрештә булмай.

Министр урынбаҫары күрһәтмәһе менән килгәнгәме, Аҡтау дауаханаһында һағайыбыраҡ, кемдәр һуң былар, тигән һымағыраҡ ҡаршыланылар. Тамара Олеговна иһә: "Мине ҡайҙан, кемдән белдегеҙ, миңә нисек сыҡтығыҙ?" - тип үк һораны.

- Һеҙҙең кеүек данлыҡлы табипты Аҡтауҙа ғына түгел, күрше райондарҙа ла белмәгән кеше юҡ. Министр урынбаҫары ла белә, - тине Тәлғәт ихлас йылмайып.

- Эйе, эйе, медицина институтында уҡыған сағында ул беҙҙә практика үткәйне шул. Бик тә һәләтле егет, кешелекле, кеселекле.

Тамара Олеговна Алтынтау дауаханаһы биргән медицина картаһы күсермәһенә баҡты, бошонғандай булды, шунан тамыр, йөрәк тибешен ентекләп тикшерҙе һәм болот ышығынан сыҡҡан ҡояштай, йөҙө яҡтырып китте:

- Йөрәге - йөрәк, шәп әле. Тор әле, апай, тор, үәт шулай, шулай. Йөрөп тә ҡара. Бик яҡшы. Инде ошо урындыҡҡа ултыр.

Тәлғәт ҡайнағаһына ҡараны. Ул бер һүҙ ҙә ҡатмай аптырап ҡарап тик тора. Алтынтау хәстәханаһында аҙналар буйы аяҡҡа баҫтырмай яткырғандан һуң әле икенсе табиптың инәһенә "тор", "йөрө" тиеүе сәйер тойолалыр, күрәһең. Ә Тамара Олеговна ауырыуҙы тағы ла ауырыраҡ хәлгә төшөрөүселәрҙе бешә:

- Алтынтау дауаханаһында кемдәр эшләй ул? Ветврачтармы? Ниндәй уҡыу йорто диплом биргән уларға? Хәсрәттәр! Дөрөҫ диагноз ҡуймағандар, әүәл дауаланып ятмаған, ҡәҙимге таблетка ла ҡапмаған кешене көслө антибиотиктар менән аңраландырып һалып ҡуйғандар, күҙҙәрен быялаға әйләндергәндәр.

Тамара Олеговна ҡарсыҡҡа төрлө һорауҙар бирә башланы. Урыҫса аныҡ яуап бирә алмаҫ, тип, Тәлғәт ҡыҫылды. Ауырыуҙы ҡарап бөткәс, Аҡтауҙың шөһрәтле үә тәжрибәле табибы уның балаларына шуны әйтте:

- Бер ниндәй йөрәк сире юҡ. Әбейҙең баш мейеһе артериялары зарарланған. Әйткәндәй, был нәҫелдән түгел. Айырым тамырҙар өлкәһе ҡыйралған, баш мейеһен ҡан менән тәьмин итеү хөртәйгән, һөҙөмтәлә хәтере ҡаҡшаған. Шунан һуң, ҡартайыуы ла һиҙҙерә. Ҡыҙғанысҡа күрә, был осраҡта һауыҡтырыу, хәтерен тергеҙеү әмәлдәре юҡ. Әлбиттә, хәлен яҡшыртыу өсөн дауаханаға һалабыҙ, мөмкин булғанса дауалайбыҙ.

- Аңлауымса, артабан хәтере тағы ла нығыраҡ томаланасаҡ, яңғыҙы көн күрә алмаясаҡ, йәше лә бара, - тип хафаһын әйтте Тәлғәт. - Өфөгә алып китергә тура килерме икән?

- Ҡалаға һис кенә лә ярамай. Унда ялан сәскәһе һымаҡ һулыясаҡ. Ғүмер баҡый күнегелгән урында, бөтәһе лә ғәҙәтенә һеңгән ерендә йәшәү хәйерле уға.

Тамара Олеговнаның рөхсәте менән Ғәлиә инәһе янында ҡалды, уға тәрбиә ҡылды. Тәлғәт иһә ауылдан көн аралаш Аҡтауға йөрөнө, кәрәк-яраҡ, аш-һыу алып барҙы, өс аҙна үткәс, ҡәйнәһен өйөнә алып ҡайтты.

* * *

Үҙ йортонда Сәғирә ҡарсыҡ йәнә егәрле хужабикәгә әйләнде. Өйө алдындағы ҡойонан биҙрә-биҙрә һыу индереп, һауыттарҙы тултыра. Газды ҡабыҙып, мөлдөрәмә тулы сәйнүк ултырта. Һыу ҡайнап, ташып, утты һүндерә. Газ еҫен иҫкәрмәй, электрҙы яндырып ебәрһәң, ут ҡойононда ҡаласаҡһың. Шуға ла Тәлғәт газ баллонын ябып ҡуйҙы. Әммә ҡәйнәһе тынғы белмәй, сыҡҡан һайын ҡосаҡ-ҡосаҡ утын индерә, әшәккә яға. Электр сәйнүген плитаға ултыртып, иретеп ҡуйҙы.

- Тышта утыҙ градус эҫе бит, яҡма, өйгә ингеһеҙ, тын алғыһыҙ, инәй, - тип, ҡыҙы ҡат-ҡат әйтеп тә ҡарай, мәгәр ҡарсыҡ, бороп ебәрелгән нәмәләй, утын индереүҙән бушамай. Әйтеүҙән фәтеүә юҡ. Шырпыны йәшереп ҡуйырға тура килде. Әммә, ашарға бешерәм, тип, ут яғыуынан йәһәт кенә ҡотолоп булманы, шырпы эҙләп, магазинға барҙы, күршеләренән һорап алды. Хәлде төшөнөп, бирмәгәстәре, был ниндәй заман, һуғыш ваҡытындағы кеүек ут һыҙғысҡа ла ҡытлыҡ, тип зарланды.

Сәғирә ҡарсыҡтың башҡаса бер үҙе донъя көтә алмаясағы көн кеүек асыҡ ине. Күршеләре утфәлән сығарып ебәрмәһен, тип ҡурҡа. Ә Ғәлиә менән Тәлғәттең эшкә сығыр, китер ваҡыттары ла етә. Нишләргә? Ҡарсыҡ менән бергә тора, уға күҙ-ҡолаҡ була алырлыҡ ҡатын-ҡыҙ эҙләп ҡаранылар. Ҡапылғара ундай кеше табылманы. Кәңәш-төңәш итергә Ғәлиәнең ҡустыһы Илбәк менән һеңлеһе Ғәбиҙәне саҡырҙылар.

- Мишәр ҡасабаһында ҡарттар йорто бар. Йылы, йыйнаҡ, уңайлы, ҡараусылары кеселекле, кешелекле. Инәйҙе шунда алып барайыҡ. Әбей-бабайҙар менән аралашыр, сөкөрләшеп ултырыр. Хатта район түрә-ҡараларының бөтә зат-бото шунда, - тип тәҡдим итте Илбәк.

- Кит, иҫәүән, уйламай-нитмәй хәл ҡылмаҡсыһың. Бар халыҡ мыҫҡыл итеп һөйләр, ояты ни, килешмәгәнде, - тине өлкән ағаһы Ғәбит.

- Килешмәһә, үҙең алып ҡайт. Фатириың ҙур, дүрт бүлмәле.

- Инәйҙең ҡыҙ балалары бар. Шунан һуң уның ҡалала сыҙай торғаны бармы? Көн һайын ҡайтам тип ҡаңғыртыр. Ғәбиҙә туғаным, моғайын, инәйгә һиндә йәтеш булыр. Пенсияһы ла арыу ғына, һинең эш хаҡыңдан күберәк. Ирең эшһеҙ ятҡанда алтын тапҡандай тойолор.

- Ярай, улайһа, беҙҙә йәшәп ҡараһын, - тип ризалашты Ғәбиҙә. - Ирем генә ҡаршылашып, тартҡылашып маташмаһа инде.

Икенсе көндө үк Илбәк йөк машинаһы алып килде. Донъяһын туҙҙырмайыҡ әлегә, тиеүгә ҡарамаҫтан, ярһыу холоҡло Илбәк һарыҡтарын, тауыҡтарын ғына түгел, һыуытҡысын, телевизорын, карауатын, йөн-фәләнен дә тейәтте. Әрҙәнә-әрҙәнә ярылған утынын да оҙатырға ниәтләгәйне, Тәлғәт ҡаршы төштө:

- Барған ерендә, Урмансыла, урман өҫкә ауырға тора, ҡәйнеш. Ҡалһын утыны. Сит ауылда инәйең әллә сыҙай, әллә юҡ әле. Әйләнеп ҡайтыуы ла ихтимал. Ғәббәс кейәүеңдән дә холҡон беләһең.

Сәғирә ҡарсыҡтың йортонда бесәйе генә тороп ҡалды. "Былай ҙа үҙебеҙҙең өйҙә ике бесәй, өсөнсөһө кәрәкмәй", тип, Ғәбиҙә уны алманы. Мыраубикә бикле ишек төбөндә көндәр-төндәр буйы мыяулап, индереүҙәрен ялбарып ултырҙы. Мәгәр ишек асылманы. Ҡара көҙ еткәс, ауылға ике-өс көнгә Ғәлиә менән Тәлғәт килеп китте. Уларҙы ғәжәпкә ҡалдырып, ҡайҙандыр бесәй пәйҙә булды. Ябыҡҡайны, йонсоғайны. Өйгә кереп ураны. Хужабикәһен тапмағас, йәнә күҙҙән юғалды.

Ошо хәлде зиһененән үткәреп, йән эйәһен йәлләп, Тәлғәт уйланды. Был йорт йәнлеге кеше көнлө, әҙәм дә ҡартайғас, кеше көнлө. Улар араһында беҙ белеп, тойоп етмәгән нескә бәйләнеш бар. Бесәй ҡарғышы хужаһына төшә, тиҙәр. Әллә ҡәйнәһе бесәй балаларының йәберен алдымы икән? Бесәйҙәре балалаһа, күҙҙәре асылмаған йомарсайҙарын, мәгәр йән эйәләрен, биҙрәләге һыуға батыра торғайны. Үсһәләр, уларҙы нисек аҫрайһың, ҡайҙа итәһең, тигәндер инде. Аҙаштырһаң да - гонаһ...

Башҡа әбейҙәр һымаҡ, ҡәйнәһе доға ла уҡыманы. Ысын күңелдән ышанып доғалар уҡыһаң, күп уҡыһаң, ҡан, йән таҙара, тиҙәр бит. Доға уҡылған һыу ҙа оҙаҡ боҙолмай, шифалы, сихәтле имгә әйләнә. Йәнә әхирәттәге рух-әруахтарҙы ризалау, ете быуынға бағышлап әлхәм уҡытып, ҡырҡ көн һайын ете кешегә хәйер биреү ҙә хәйерле. Ризаламаһаң, бәлә-ҡазаға дусар булаһың, имеш. Тәүге ишара - мал-тыуар зыянлар, әйбер-ҡараң юғалыр, мөлкәт ырыҫы китер, бирмәгәнеңдә "нескә кимәл" үҙе алыр. Быға иғтибар итмәһәң, икенсе ризаһыҙлыҡ билдәһе - тән яфаһы тыуыр, сир-зәхмәт ҡағылыр. Шунан һуң да рух-әруахтарҙы ризаламаһаң, йән ғазабы - психик хәсрәт баҫыр. Әллә иҫерек килеш баш менән ташҡа оролоу, әллә бесәйҙәр ҡарғышы, әллә "нескә кимәл"де тотмау психик ыҙаға тарыттымы, йән тыныслығынан яҙҙырҙымы икән ҡәйнәһен?.. Аллаһы Тәғәлә генә белә.

* * *

Тау-таш, урман ҡосағында ята Урмансы ауылы. Бында көн торошо икенсерәк: ҡыш - һалҡынсараҡ, йәй - еләҫерәк. Халҡы ла башҡасараҡ, ҡырыҫырыҡ. Өйҙәре иһә - ҙур, иркен. Мал аҫрап, ҡош-ҡорт үрсетеп, бәрәңге, йәшелсә үҫтереп, ғәмәлдә ҡанбабаларса шәхси хужалыҡ иҫәбенә донъя көтәләр. Күмәк хужалыҡ тырым-тырағай булғас, ир-ат эшһеҙ, мәлһеҙ. Бәғзеләр генә утын ҡырҡып, һатып, бура бурап, һирәк-мирәк килем ала, йыртыҡ-мыртығын ямай, башҡалары аҙ-маҙ тапҡанын да хәмер-һәмергә әләфтәләф итә.

Ғәббәс менән Ғәбиҙәнең өйө бүтәндәрҙекенән ҡайтышыраҡ, ҙурайтырға дарман-далан тапмайҙар, барына ҡәнәғәт ҡылып ғүмер һөрәләр. Теремеклек, йүнселлек етмәгәс, тереклек тә бер сама, таң ата ла кис була, һәр көн ҡәҙимгесә ҡабатлана. Өй түрендә ултырған төҫлө ҡумта ғына зиһенде арбай, үҙенә ҡарата, илдәге хәл-әхүәл, яңылыҡтар менән таныштыра, ары-бире күңелдәрҙе балҡытып, кәйефтәрҙе күтәреп ебәрә, ваҡытты оноттора, төндә ойотоп, йоҡоға талдыра.

Күрер күҙгә Ғәббәс - им табырҙай кеше. Мәгәр һәләтен файҙаланмай, донъянан төңөлгәндәй йәшәй. Моғайын, эш, килер ер юҡлығы өмөтһөҙлеккә төшөрәләр, бәрәкәтен ҡасыралыр. Ғәйрәтең барҙа дәүләт табыу фарыз, тигәнде аҡыл итеү ҙә етмәйҙер.

Сәғирә ҡарсыҡ ҡашығаяҡ яғындағы ятағында иҫнәп ултырып, бик иртә йоҡоға тала. Ғәҙәтенсә, таң әтәстәре менән бергә уяна, утты яндырып, тегеләй-былай йөрөй башлай, ҡыҙы менән кейәүе серем итеп ятҡан бүлмәгә килеп инә, уларҙы мәле етмәй йоҡоларынан яҙҙыра. Был, әлбиттә, кейәүенә һис тә оҡшамай. Ғәбиҙә инәһенә: "Таң һарыһынан шаулап йөрөмә, беҙҙе борсома", - тип, көлөп тә, көйөп тә, тыйып та әйтеп ҡарай. Мәгәр ҡарсыҡ ҡыҙының ҡыҙыуын шунда уҡ онота.

Ҡәйнәһенең төндә хаттин ашып хырылдауы ла, көндөҙҙәрен бер нәмәне әйләнгән һайын ҡат-ҡат һорауы ла асыуын ҡабарта, тәҡәтен ҡорота кейәүенең. Ул да башҡа ир-ат кеүек бер ҡайҙа ла эшләмәй, ауылда ла, яҡын тирәлә лә эш юҡ. Малына бесән һалып инә лә, әлеге лә баяғы йәнһүрәтле ҡумтаға төңөлә, Ғәбиҙә медпунктҡа йүгерә. Ул китеү менән Сәғирә ҡарсыҡ өй эштәренә тотона, бәрәңге бешерә, кейәүе ултырған урындыҡ янына ашамлыҡ ташый, уны ашарға ҡыҫтай. Шунан утынлыҡтан ҡосаҡ-ҡосаҡ утын кертә, әшәккә яға. Өй тын алғыһыҙ булып эҫей. Әйтеп-әйтеп тә был ҡылығынан дүндерә алмағас, кейәүе әшәк ҡапҡасын тимер сылбыр менән йоҙаҡлап ҡуйҙы. Ҡарсыҡ иһә асырғанып:

- Усаҡ яғыуымды ла ек күрә былар, минән утындарын да йәлләйҙәр, - тип һөйләнә.

Ҡыҙына, кейәүенә оҡшамаған ҡылыҡ-тороҡтарынан арынмаҙы Сәғирә ҡарсыҡ, йә бында, йә тегендә фәҡәт үҙенекен ҡылды. Күтәрмәне һепереүе, һарыҡтарға ашлы һыу эсереүе, тауыҡтарға ем һибеүе хуплауға ғына лайыҡ, әлбиттә. Мәгәр кейәүе, емде күп бөтөрә, әрәм-шәрәм итә тип, келәтен дә бикләп ҡуйҙы. Үҙе иһә төшкә тиклем мал тиҙәген дә алмай, йорт эсен дә һепермәй, телевизор ҡарап тик ултыра, ятҡан шөғөлө шул. Ҡәйнәһе һоҙғаҡ көрәккә, селектән бәйләнгән һаплы һеперткегә йәбешһә - төҫө боҙола. Ирҙәр эшенә тотоноп, мине күршеләр алдында хур итә тип, Ғәббәс һеперткеһен ҡәйнәһенең күҙ алдында көпкәгә индереп бикләне. Сәғирә ҡарсыҡ асырғанып ишеген бар көсөнә тартҡайны - биге ҡутарылды ла сыҡты. Бынан һуң кейәүе һеперткеһен сүплеккә алып барып быраҡтырҙы, ләкин ҡәйнәһен туҡтата алманы, ул йорт эсен ҡаҙ ҡанаты менән һеперә башланы.

**(Дауамы бар.)**

## ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...



**Башҡортостандың баш онкологы Владимир Ручкин менән әңгәмәбеҙ Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетының сәләмәтлек һәм экология буйынса комиссияһы "Башҡортостан Республикаһында онкологик ауырыуҙарҙы профилактикалау" тип аталған түңәрәк ҡор алдынан булғайны. Унда шулай уҡ БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы, БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы вәкилдәре, БР-ҙың милли-мәҙәни үҙәктәре етәкселәре, БДМУ уҡытыусылары, табиптар ҡатнашты.**

Комиссия рәйесе, медицина фәндәре докторы, профессор Марс Юлдашев яман шештән үлеүселәр һанының арта барыуына хәүеф белдерҙе. Был, тәү сиратта, ауырыуҙарҙың сире аҙғас ҡына табипҡа мөрәжәғәт итеүе менән бәйле. Бындайҙар бөтөн ауырыусыларҙың дүрттән бер өлөшөн алып тора, ә ҡайһы бер райондарҙа был һан тағы ла юғарыраҡ. Онкологтар етешмәүе лә беренсел диагностика үткәреү эшен ҡатмарлаштыра, бөгөнгә көндә 19 район ғына белгестәр менән тулыһынса тәьмин ителгән. Дөйөм алғанда, республикала 124 табип-онколог эшләй, 35 кеше әле белем ала. Дауаланыуҙан баш тартыусылар ҙа, башҡа төләүле клиникаларҙа, табиптар теле менән әйткәндә, төрлө имсе әбейҙәрҙә дауаланыусылар ҙа осрап ҡуя. Әйткәндәй, сит илдәрҙә дауаланырға теләүселәр һаны артыҡ түгел, былтыр ул 0,8 процент тәшкил иткән.

Онкологик сирҙәрҙең арта барыуы тирә-яҡ мөхиттең торошона ла бәйле, тип билдәләне ҡорҙа ҡатнашыусылар. Нефть, нефть эшкәртеү сәнәғәте, ҡаҙылма байлыҡтар табыу һәм тау-байыҡтырыу производстволары менән бәйле булған насар экология сәләмәтлеккә кире тәьҫир итә. Ауыл ерендә йәшәүселәрҙең һаулығына ауыл хужалығында киң ҡулланылған химик ашламалар һәм гербицидтар йоғонто яһамай ҡалмай. Күпләп урман ҡырҡыу ҙа экологияның боҙолоуына килтерә. Өфө, Стәрлетамаҡ кеүек эре ҡалаларҙа һауала газ күләме ҙур булыуы бында йәшәүселәрҙең һаулығын хәүеф аҫтына ҡуя. Белгестәр әйтеүенсә, яман шеш менән ауырыусылар араһында ҡалала йәшәүселәр күберәк. Сарала ҡатнашыусы БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығы вәкилдәре билдәләүенсә, төрлө предприятиелар тарафынан атмосфераға ташланған сәнәғәт ҡалдыҡтары ғына түгел, ә автомобилдәрҙең күбәйеүе лә был хәлде ҡатмарлаштыра. Ҡалаларҙағы сүп-сар полигондары химик, синтетик ҡалдыҡтар менән тулы, улар башҡа матдәләр менән контактҡа инеп, кеше, тупраҡ һәм тирә-яҡ өсөн хәүефле яңы ҡушылмалар барлыҡҡа килтерә. Граждандар һәм предприятиелар араһында аңлатыу эштәре алып барылыуға ҡарамаҫтан, был йүнәлештә башҡарыласаҡ эштәр байтаҡ әле.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Беҙ, ябай кешеләр, экологияны үҙгәртеү, тәбиғәтте элекке саф хәленә ҡайтарыу мөмкинлегенә эйә түгелбеҙ, ҡыҙғанысҡа ҡүрә. Әммә яман шеш кеүек ауыр сирҙе булдырмау ғына ҡулыбыҙҙан килә. Сирҙе дауалауға ҡарағанда, иҫкәртеүе күпкә еңелерәк һәм осоҙораҡ та. Шуға ла сәләмәтлегегеҙгә битараф булмағыҙсы.**

## МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ



# КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК



### Доға, рәхмәтле булыу...

**Йөҙҙәрсә миллион кеше көн һайын доға уҡый, сәләмәтлек, именлек һорай, ә һөҙөмтә юҡ. Ни өсөн? Сәбәбе ябай - кешеләр үҙ һүҙенең көсөн юғалтҡан. Балалар баҡсаһында, йүгермә, ҡысҡырма, тигәндәр, мәктәптә, тыңла, аҡыллы бул, тигәндәр, институтта, кеше маймылдан барлыҡҡа килгән, тип аңлатҡандар.**

Бала саҡтан уҡ кеше ниндәйҙер ҡанунға бәйләнә, ахырҙа, ул тулыһынса үҙ һүҙенең көсөн юғалта. Шунан һуң нисек итеп доғалар тормошҡа ашырға тейеш һуң?

Һүҙ көсөн кире ҡайтарыу, тимәк, барлыҡ ҡанундарҙан, ҡуйылыштарҙан, ышандырыуҙарҙан баш тартып, үҙеңдең хәҡиҡәтеңдә талап итеү, үҙеңдең илаһилығыңды ҡайтарыу ул.

Доға - Аллаһы Тәғәләгә шәхси мөрәжәғәт. Әгәр һеҙ илаһилығығыҙҙы кире ҡайтарһағыҙ һәм көсөгөҙҙө бер кемгә лә бирмәһәгеҙ, тимәк, һеҙ үҙегеҙҙең һәләтегеҙҙе кире ҡайтарғанһығыҙ.

Үҙең өсөн доға уҡырға, ихлас күңелдән һорарға кәрәк. Бары тик күңелдән сыҡҡан доға ғына Хоҙайға барып етә.

Шундай тәжрибә үткәргәндәр: кешенең аураһын фотоға төшөрөп алып, уға доға уҡырға ҡушҡандар. Доға уҡығандан һуң аура ҡапыл насарланған. Сәбәбе шунда: уҡыған кеше күңел төшөнкөлөгөндә булған. Уға сәбәбен аңлатҡас, ул ошо уҡ доғаны мөхәббәт менән уҡыған - аураһы ҡапыл яҡшырған. Шулай итеп, доға уҡығандағы хәл-торошоғоҙ ҙа мөһим әһәмиәткә эйә.

Беҙ кармабыҙҙы тормош һабаҡтары аша таҙартабыҙ. Беҙ ошо тормошта башҡаларға ниндәй мөнәсәбәттә булғанбыҙ, беҙгә лә шундай мөнәсәбәттә булалар. Әгәр был һабаҡтарҙы бер нисек тә аңларға теләмәһәк, хәл-торош гелән ҡабатланып торасаҡ. Шуға күрә тормошоғоҙҙа ниндәйҙер насар хәл-ваҡиға булһа, тәү сиратта, ҡайҙа, ҡасан, кемгә шундай мөнәсәбәттә булғанлығыҙҙы иҫләргә тырышығыҙ һәм артабан бер кемгә лә бындай мөнәсәбәттә булмағыҙ.

Тағы бер сер: каузаль (карма) тәндә рәхмәтле булыу аккумуляторыбыҙ бар. Ул беҙҙең адресҡа ғүмер дауамында тупланған рәхмәт һүҙҙәре. Беҙ юғары көстәргә мөрәжәғәт иткәндә, тап ошо аккумуляторҙағы энергияны файҙаланып, ярҙам ҡулы һуҙалар ҙа инде. Аккумуляторҙа энергия запасы ни тиклем күп - ярҙам шул тиклем тиҙерәк киләсәк. Йыһан ҡанундары ғәҙел һәм гармониялы.

Ҡайһы бер ваҡыт: "Бына ул даими гонаһ ҡыла, ә яҡшы йәшәй, ни өсөн шулай?" - тигән һорау бирәләр. Был кеше элекке ғүмерҙәрендә бик күп изге эштәрҙән энергия туплаған һәм хәҙер шуны файҙалана. Ә уның киләсәге бөгөнгө эшмәкәрлегенә бәйле.

Бәгзеләр: "Мин барыһына ла ярҙам итәм (кәңәш бирәм, матди ярҙам күрһәтәм), ә минә, киреһенсә, гел насарлыҡ килә", - тип үпкәләй. Был осраҡта, моғайын, һеҙ үҙегеҙҙең ярҙамығыҙҙы көсләп тағып, сит кармаға тығылып, насарлыҡ килтерәһегеҙҙер.

Һәр кем үҙ һабаҡтары аша үтергә, үҙе һығымта яһарға тейеш. Һәр кемдең үҙ юлы. Бер кем дә һеҙҙең яҙмышығыҙҙы һәм юлығыҙҙы ҡабатларға тейеш түгел.

Изгелек эшләп, рәхмәт һүҙҙәре көтмәгеҙ, ярҙам итеүҙең үҙенән ҡәнәғәтлек алығыҙ. Әгәр һорамайҙар икән, бер кемгә лә кәңәш бирмәгеҙ. Һорайҙар - ярҙам итегеҙ. Үҙегеҙ бәхетле икән - кәңәш бирегеҙ.

Бер пациент (65 йәштә) ваҡыты, ял көндәре юҡлыҡҡа зарлана, үҙ эше, үҙ фирмаһы бар. "Нимәгә һеҙгә шул тиклем аҡса?" - тип һорағас, улыма, тип яуапланы. Ә улына 42 йәш, бер ҡайҙа ла эшләмәй, дуҫтары менән машинала елдерә, бер йылда ике машинаның башына еткән. Ә әсәй кеше улына изгелек эшләйем тип уйлай.

Карманы тормош һабаҡтары аша түгел, ә ихлас күңелдән ғәфү итеп һәм тәүбәгә килеү аша таҙартырға мөмкин. Беҙ бер кешегә ҡарата ла дошманлыҡ хисе һаҡларға тейеш түгелбеҙ. Түбәндә шундай доғаның вариантын тәҡдим ителәә. Уны яңғыҙ ҡалғас, тыныслыҡта, ихлас һәм мөхәббәт менән уҡығыҙ:

Аллаһы Тәғәләнән мине был һәм үткән тормошомда ҡылған камил булмаған уйҙарым, эмоцияларым, ғәмәлдәрем өсөн ғәфү итеүен ихлас һорайым.

Миңә ҡасандыр ниндәйҙер насарлыҡ эшләүселәрҙе ғәфү итәм һәм Һеҙҙең менән барлыҡ карма бәйләнештәрен өҙәм.

Аллаһы Тәғәләнән тулы рухи һәм физик сәләмәтлек биреүен үтенәм!

**Рауфан МОРТАЗИН.**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## Нисек ялҡын өҫтәргә?

**"Хәрәкәт итеү маҡсаты өсөн ихтыяр энергияны менән фекерҙе туплауҙан да файҙалыраҡ бер нәмә лә юҡ", тигән Анри Фредерик Амьель. "Түҙемлек - ирҙәргә хас сифат", тип яҙа Квай-Ку-Цу. Ысынлап та, уңыш ҡаҙаныр өсөн түбәндәге пункттарҙы түҙемле генә үтәргә кәрәк.**

**Программаны көн һайын үтәгеҙ.** Был ысулдар һеҙгә ғәҙәти булмаған кеүек күренер, ләкин уларҙы үҙегеҙ һынап ҡарап, файҙаһы булыуын күреһегеҙ. Әгәр беренсе көндән уҡ һөҙөмтә юҡ икән, танауығыҙҙы төшөрмәгеҙ. Тикшеренеүҙәр шуны раҫлай: тормошоғоҙҙо камиллаштырыуға тотонғандан һуң һиҙелерлек үҙгәрештәр барлыҡҡа килһен өсөн кәмендә 21 көн кәрәк. Тәҡдим ителгән программаны көн һайын үтәп, һеҙ үҙегеҙҙе яҡшыраҡ тойорһоғоҙ, һөҙөмтәләрәк эшләй башларһығыҙ, ҙурыраҡ уңыштарға өлгәшерһегеҙ. Тормошоғоҙға ҙур булмаған, әммә көндәлек даими һәм өҙләкһеҙ үҙгәрештәр индереп, һеҙ энтузиазмығыҙҙы күтәрерһегеҙ, уңыш яуларһығыҙ. Әммә бер көндө бушҡа үткәрһәгеҙ икән, тимәк, алға бер аҙым да яһамаһығыҙ, киреһенсә, бер аҙым артҡа тәгәрәнегеҙ, тигән һүҙ. Шуға күрә был революцион программанан бер көнөгөҙҙө лә төшөрөп ҡалдырмаҫҡа тырышығыҙ. Ҡайһы бер көндәр, әлбиттә, башҡаларына ҡарағанда ауырыраҡ булыр. Әммә тап дисциплина "түбән энергетикалы" көндәрҙе лайыҡлы үтергә ярҙам итер.

**Тормошто камиллаштырыу программаһын тормошҡа ашырыу өҫтөндә ныҡышмалы эшләргә тырышығыҙ.** Был - үҙ донъяғыҙҙы үҙгәртеп ҡороу һәм тормош яланында төп уйынсы булыу өсөн иң яҡшы мөмкинлек. "Уңыш журналы" асып, унда көн һайын алға китешегеҙҙе, уй-фекерҙәрегеҙҙе, уңыштарығыҙҙы яҙып барығыҙ. Көн дауамында, ҡайҙа ғына булһағыҙ ҙа, уйығыҙҙа тормошоғоҙҙо яҡшыртыу өсөн ҡабул иткән барлыҡ ҡарарҙарығыҙҙы ҡабатлағыҙ.

**"Мега тормош"ҡа инеүегеҙҙе башҡаларға еткерегеҙ.** Ғаилә ағзаларына, дуҫтарығыҙға ошо программаға инергә теләүегеҙҙе әйтегеҙ һәм улар тиҙҙән ҙур үҙгәрештәр шаһиты булыр. Уларға маҡсаттарығыҙ тураһында һөйләгеҙ, пландарығыҙ менән бүлешегеҙ. Был - мотивация алыу һәм ҡарарҙарҙы нығытыу өсөн шәп алым. Бер кемдең дә ихтыяр көсө, ныҡышмалығы булмаған кеше булып күренгеһе килмәй бит. Тирә-яҡтағыларҙың баҫымы һеҙҙе ыңғай һөҙөмтәләргә этәрер. Үҙегеҙҙе лә, ҡаҙаныштарығыҙҙы ла башҡалар менән сағыштырмағыҙ. Һеҙ - үҙегеҙгә генә хас һәләттәр һәм етешһеҙлектәре булған айырым башҡа йән эйәһе. Боронғо көнсығыш мәҡәләндә әйтелгәнсә: "Кемдәндер юғарыраҡ булыуҙан да яҡшыраҡ бер нәмә лә юҡ. Ысын яҡшылыҡ хәҙерге үҙ-үҙеңдән юғарыраҡ булыуҙа".

**Робин ШАРМА.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# АВТОНОМИЯНЫ КЕМ ЯУЛАНЫ?




Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.

**11-се һандағы кроссворд яуаптары:**
1. Һалабаш. 2. Тарпан. 3. Сауҡа. 4. Ҡәйнә. 5. Терһәк. 6. Берәмек. 7. Тараҡан. 8. Һәүерек. 9. Ғауға. 10. Ҡатын. 11. Уҡлау. 12. Ҡайны. 13. Истәк. 14. Илтер. 15. Тирәк. 16. Ҡайсы. 17. Ағалтын. 18.Килен. 19. Кәрешкә. 20. Миләүшә. 21. Кәләш. 22. Теш. 23. Мишәр. 24. Яла. 25. Миң. 26. Һеңле. 27. Ситән. 28. Тәүбә. 29. Сапан. 30. Ямғыр. 31. Сәүкә. 32. Һаҡ. 33. Өшәмә. 34. Ҡараҫҡы. 35. Тауыҡ. 36. Иғлан. 37. Ҡарағат. 38. Шамбы. 39. Таралғы. 40. Ҡырау. 41. Ҡамыт. 42. Быйма. 43. Талпан. 44. Балыҡ. 45. Ҡасыр. 46. Магнит. 47. Аҡтамыр. 48. Имтихан.

ХОККЕЙ

# ҠЫҘҘАР ҘА УЙНАЙ...

**"Ағиҙел" - Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙарының берҙән-бер хоккей командаһы тиерлек. Беҙҙең гүзәл заттар Рәсәй континент хоккей лигаһының ҡатын-ҡыҙҙар чемпионатында икенсе тапҡыр ғына ҡатнашты. Әммә улар баш тренер Сергей Тудаков етәкселегендә ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ҙур хоккей юғарылығына күтәрелде.**

"Ағиҙел" был юлы Өфө аренаһында Красноярск крайының "Локомотив-Энергия" командаһы менән көс һынашты һәм уларҙы 8:1 иҫәбе менән тар-мар итеп, чемпионаттың бронза миҙалын яуланы.

Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙары матч башланыу менән үк тиерлек уйын дилбегәһен үҙ ҡулына алды һәм матч бөткәнсе ысҡындырманы. Ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс осрашыуҙа Митрофанованың бер-бер артлы өс шайба индереүе үҙе генә ни тора! Ул үҙен иң оҫта һәм мәргән хоккейсы итеп танытты.

"Ҡурҡаҡтар хоккей уйнамай" тигән лаҡап бар. Башҡортостандың батыр ҡыҙҙары хатта ир-егеттәрҙән шәберәк уйнаны. Әйтәйек, "Салауат Юлаев" сирек финалда уҡ Гагарин кубогы өсөн көрәштә еңелде, ә "Ағиҙел" ҡатын-ҡыҙҙар командалары араһында бронза миҙал менән бүләкләнде.

# "ТОРОС" ҺЫНАТМАЙ

**Юғары континент хоккей лигаһының Көнсығыш конференцияһында Нефтекама ҡалаһының "Торос" командаһы - иң көслөләрҙең береһе. Ул көйәрмәндәрҙе үҙенең тоторо҇ҡло һәм ышаныслы уйыны менән ҡыуандыра.**

"Торос" Көнсығыш конференцияла һәр ваҡыт алдынғы урындарҙа килде һәм икенсе урындан түбән төшмәне. Бына шулай, "Торос" Харламов кубогын яулау өсөн көрәшкә көслө командалар иҫәбендә ҡушылды. Нефтекама хоккейсылары плей-оффта ла уңышлы уйнай. Улар Харламов кубогы өсөн көрәштә Себерҙең "Ермак" командаһын үҙ майҙанында ҡабул итте һәм ике осрашыуҙа ла еңеп сыҡты. Харламов кубогы өсөн көрәш артабан Ангарск ҡалаһында дауам итәсәк.

**Юныс ӘХМӘҘИЕВ.**

ҮӘТ БИТ ӘЙ!



# ИНТЕРНЕТ АША ЛА...

## банкомат аша урлайҙар

**Юғары технология үҫешкән һайын мутлашыусылар ҙа камиллаша. Улар хәҙер аҡсаны Интернет ярҙамында ла урлай йәки төрлө түләүҙәр башҡара ала. Өфөлә, мәҫәлән, банк картаһынан аҡса урлау осраҡтары теркәлгән.**

Мутлашыусылар банкоматҡа видеокамера йәки скиммер ҡуя. Камера ҡулдар артынан күҙәтеп, пин-кодты, ә скиммер түләү картаһының магнит юлын уҡый. Артабан магнит таҫмаһының күсермәһе нигеҙендә ялған карточка эшләнә һәм банкоматтан аҡса алына. Шуның өсөн банкомат менән ҡулланыусыларға һаҡ һәм иғтибарлы булырға кәңәш ителә.

* * *

**Өфө - власты яратыусы ҡалалар араһында өсөнсө урынды биләй.**

"Власть" эшлекле аналитик журналы Рәсәйҙең ҙур ҡалалары араһында әлеге федераль власҡа ыңғай ҡараусыларҙы асыҡлаған. Баҫма эксперттары 500 мең кешенән күберәк йәшәгән 37 ҡаланың һуңғы 11 йыл эсендә булған һайлау һөҙөмтәләре менән танышҡан. Өфө был рейтингта өсөнсө урында. Беренсе һәм икенсе урындарҙы Махачкала менән Ҡаҙан ҡалалары бүлешкән. Шулай уҡ ыңғай рейтингка Түбәнге Яр Саллы, Әстрхан, Саратов һәм Төмән ингән, ә Владивосток, Иркутск һәм Омск ҡалалары эксперттар тарафынан иң оппозицион ҡалалар, тип табылған.

- Республика халҡы электән консервативлығы һәм либераль ҡиммәттәрҙән алыҫ тороуы менән билдәле, - ти политолог, Башҡортостан Дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһының сәйәси тикшеренеүҙәр бүлеге етәксеһе Николай Евдокимов. - Был мосолман республикаһы һәм көнсығыш менталитетлы төбәктәр өсөн хас күренеш.

* * *

**Ришүәт алыусылар һаны буйынса врач һәм уҡытыусылар лидерлыҡты бирмәй, ләкин ришүәт суммаһы буйынса чиновниктар уларҙы бик күпкә артта ҡалдыра.**

2011 йылда Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының иҡтисади енәйәттәр менән көрәш бүлеге хеҙмәткәрҙәре алты меңгә яҡын енәйәтте асыҡлаған. Уларҙың һәр дүртенсеһе - ҙур күләмле ришүәт.

Ришүәт алыуҙа, элеккесә, иң күбе врачтар һәм уҡытыусылар ғәйепләнә. Ләкин ришүәт суммаһы буйынса тәүге урынды чиновниктар биләй. Әйткәндәй, халыҡ хеҙмәтселәре элек үҙ хеҙмәттәрен яҡынса 100 мең һумға баһалаһа, бөгөн иһә һәр бер ҡулға уртаса 227 мең һум тура килә.

Ришүәтселектең иң күбе торлаҡ-коммуналь хужалыҡта теркәлгән. Мәҫәлән, былтыр полиция хеҙмәткәрҙәре был өлкәлә дөйөм суммаһы 75 миллион һумдан артып киткән 97 енәйәтте фашлаған.

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# БАШҠОРТ ЮМОРЫНЫҢ...

## матур өлгөһөнә әйләнә "Шаяниум"

**"Көлкөнө күп һуҙһаң, күңелһеҙгә әйләнә" ти халыҡ аҡылы. Әммә дүрт көн дауамында барған "Шаяниум" береһен дә ялҡытманы. Ялһыҙ эшләгән жюри ағзаларына уйындарға баһа биреп, үҙ фекерҙәрен белдереүҙәрен һорап мөрәжәғәт иттек.**


"Ша-Шу-Ша" командаһы.


"Етегән+1" командаһы.

**Азамат ЮЛДАШБАЕВ, "Шоңҡар" журналының баш мөхәррире:** Был бала башҡалар һымаҡ илап түгел, ә көлөп тыуҙы. Тыумыштан бик теремек, хәрәкәтсән һәм шуҡ булды. Теле иртә асылды, шаян һәм мут булды. Был малайҙың бейеү һәләте, музыкаль таланты яҡты донъяға килеүенең тәүге көндәренән үк асыҡ төҫмөрләнде. Аңлағанһығыҙҙыр уның кемлеген - һүҙ "Шаяниум" тураһында бара. Уға 10 йәш. Бер уйлап ҡараһаң, сабыйлыҡтан саҡ сығып килә, икенсе яҡтан, ошо ҡыҫҡа ғына ғүмер эсендә милли мәҙәниәтебеҙҙә "шаяниумсылар" тигән айырым бер социаль ҡатлам барлыҡҡа килде. "Шаяниум"ды үткән балалар, иманым камил, ошо быуаттың уртаһында зыялыларыбыҙҙың аҫыл ҡатламын тәшкил итәсәк. Башҡорт ҡала мәҙәниәтен формалаштырыуға тос ҡына өлөш индереүсе "Шаяниум"ға уңыштар теләр инем. Ә быйылғы уйындарға килгәндә инде, кимәл ярайһы уҡ юғары булды. Ни өсөн, ярайһы, тием, сөнки күп кенә командалар составы тулыһынса тиерлек яңырған. Ғәҙәттә, 2-3 команда ғына яңы состав менән сығыш яһай ине. Уларҙың быйылғы потенциалын күреп, киләһе йылда яһаясаҡ сығыштарын түҙемһеҙләнеп, ҙур өмөттәр бағлап көтәм. Бынан тыш, рус мәктәптәренең артыуы ҡыуандырҙы. Әйтергә кәрәк, уйындың оҡшамаған яҡтары ла булды. Быйылғы шаяртыуҙарҙа бөгөнгө тормош, ижтимағи-сәйәси күренештәрҙең аҙыраҡ булыуы, кинәйәле тәнҡиттең кәмеүе күңелде ҡырҙы.

**Урал ИЛСЕНБАЕВ, Өфө ҡала округы хакимиәтенең йәштәр сәйәсәте комитеты рәйесе:** "Шаяниум" балаларға башҡорт телен әҙәби тел итеп кенә түгел, ә һөйләшеү теле итеп тә үҙләштерергә ярҙам итә. Бынан тыш, конкурс туған телебеҙҙе популярлаштырыу йәһәтенән дә бик отошло. Сөнки рус мәктәптәренән дә йыл һайын төрлө командалар ихлас ҡатнашып тора. Бөгөнгө көндә рус мәктәптәре башҡорт мәктәптәре биш йыл элек күрһәткән кимәлдә сығыш яһай. Быйылғы "Шаяниум"ға килгәндә инде, ҡайһы бер командалар бик көслө әҙерләнгән. Мәҫәлән, "Башҡорттар.RU" командаһының энергетикаһы көслө ине, тамашасыны күтәрә, үҙҙәренә йәлеп итә алды улар. Тик, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, көләмәстәре бик мәғәнәле, төплө булманы. Ә бына "Ша-шу-ша" командаһының көләмәстәре бик уйланылған булһа ла, энергетикаһы һүлпәнерәк булды.

**Вильнур ХӘСӘНОВ, жюри рәйесе, "Аҙна" гәзитенең шеф-мөхәррире:** Ун йыл дауамында үткәрелә килгән "Шаяниум"да йыл да ниндәйҙер асыш, яңылыҡтар, үҙгәрештәр күрәм. Бер команда бер йылда юғары кимәлдә сығыш яһаһа, икенсе йылда әҙерәк кенә төшөп китергә лә мөмкин. "Шаяниум"да йыл һайын ярыш сәме була. Һәр хәлдә, "Шаяниум"дың маҡсаты бик юғары һәм мөһим, тип уйлайым. Ысын башҡорт юморы башҡорт үҙаңын сағылдырған, үҙебеҙсә матур яңғыраған булырға тейеш. Ошоноң өлгөһө итеп, "Шаяниум - 2012" уйынында сығыш яһаусы 102-се Башҡорт гимназияһы "Етегән+1" командаһының "Өфө ҡалаһы тел белгестәре сығарған яңы һүҙлектән" тигән сығышы айырыуса иҫемдә ҡалды. Ул "һүҙлектән" бер нисә миҫал әйтеп китәйем: "сират" - сир ат, "бураҙна" - был аҙнала иң күп урлаған бур, "ҡартайыу" - оло йәшкә еткән айыу, "самауыр" - үҙең ауыр, "шымартыу" - тауыш-тынһыҙ бала табыу. Бының ише шаярыу башыма килгәне юҡ ине әле.

**Заһир ИШКИНИН, "БашАрт" компанияһы директоры:** Быйыл "Шаяниум" фестиваль форматында үтте. Жюри баһа биргәндә тәү сиратта командаларҙың матур итеп башҡортса һөйләшә белеүенә иғтибар бүлде. Бынан тыш, матур итеп сығып, йылмайып, көлөп йөрөүҙәренә, талантарын күрһәтә белеүҙәренә өҫтөнлөк бирелде. Ошо йәһәттән "Форс мажор" командаһы бик уңышлы сығыш яһаны. Быйыл жюри составында беренсе тапҡыр ултырам, уҡыусыларҙың идеяға бай, төрлө яҡлап маһир булыуҙары һоҡландырҙы. Йыл да ошо тәңгәлдә тәнҡитле иҫкәрмәләр яһай торғас, быйылғы "Шаяниум"да балалар ҡолағына ятмаҫтай, билдән түбән көләмәстәр ишетелмәне. Был факт ойоштороусыларҙың ун йыл һалған тырышлығын аҡланы, тип уйлайым.

### АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТӘҮГЕҺЕНӘН ҠАЛМА...

## һуңғыһына барма

Ағаһы барҙың һағы бар, балаһы барҙың ялы бар.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Маҡтау ҡатын-ҡыҙҙың етештереүсәнлеген ике тапҡырға арттыра.

**(Франсуаза Саган).**

Бәхетле булыу өсөн һуҡыр булыу кәрәкмәй, тик ваҡыты-ваҡыты менән күҙҙәрҙе йомоп-йомоп алырға ғына кәрәк.

**(Марсель Ашар).**

Үҙен яраткандарын белгән кеше ҡыйыуға һәм үҙ-үҙенә ышаныусанға әйләнә.

**(Зигмунд Фрейд).**

Рәсми, закон һәм никах менән нығытылған мөхәббәт мөхәббәт буламы ни! Законлы үбешеү бер ваҡытта ла йәшеренеп үбешеү менән тиңләшә алмай.

**(Мопассан).**

Ғәфү итеү - көслөләр сифаты. Көсһөҙҙәр бер ваҡытта ла ғәфү итмәй.

**(Махатма Ганди).**

Саф йөрәктән тәҡдим ителгәнде саф йөрәк менән ҡабул итергә кәрәк.

**(Александр Дюма).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ботаҡтарын киң йәйеп үҫкән алмағас янында сал сәсле ҡарт йөрөп ята. Ул ағастан өлгөрөп еткән матур алмаларҙы өҙөп ала ла, ситкә, кеше йөрөп торған юл буйына бырағтыра. Бына уның эргәһенә ҙур кәрзин тотҡан икенсе бер кеше килә һәм ҡарттың ҡылығына аптырап:**

**- Һин нимә эшләйһең ул? - тип ҡысҡырып һорай.**

**- Мин алмаларға, өҙөлөп, ағастың төбөнә төшөп ятмаҫҡа ярҙам итәм, - ти ҡарт.**

**- Һуң, унан ни файҙа ла, ни мәғәнә? - ти кеше тағы ла ярһыбыраҡ. - Уларҙы кәрзингә йыйып алып, өйгә алып ҡайтып, ҡыш буйы рәхәтләнеп ашап ятыу яҡшыраҡ түгелме ни?**

**- Был алмағасҡа юлды ике генә кеше белә: һин һәм мин. Ләкин ситендә алмағас үҫмәгән, кеше үтеп-сүтеп торған тағы күпме юлдар бар! Был алмағастан өҙөп алған емештәрҙе һин үҙең генә ашайһың. Ә анау юл ситенә мин ырғытҡан алмаларҙы унан үтеп йөрөгән башҡа кешеләр ҙә ашай. Ә бит кешегә күңеле кинәнһен өсөн ошо юл буйындағы бер алманан ауыҙ итеү ҙә етә...**

**Был риүәйәт күҙ алдығыҙҙан ҡояш менән яҡтыртылған аҡ болот һымаҡ үтеп китһен дә, шул болот өҫтөндәге Бөйөк киңлекте, унан инде кешеләге күңел киңлеген хәтерләтһен..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 23 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5387
Заказ 1089